✓*Бер ярлы әҙәм үҙенең тормошона, Алланың уны Үҙенең изгелектәренән мәхрүм итеүенә зарлана икән. Быны ишетеп торған аҡыл эйәһе унан: "Әйт әле, һин үҙеңдең күреү һәләтеңде йөҙ меңгә һатыр инеңме?" - тип һораған. "Юҡ, әлбиттә!" - тигән ярлы кеше. "Ә башҡа ағзаларыңды?" - тип ҡайтарып һораған ғалим. "Юҡ!" - тигән ярлы. "Ни өсөн һин хатта аҡсаға алыштырмаҫлыҡ байлығың була тороп, ярлымын, тип зарланаһың?" - тип, был әҙәмде аҡылға ултыртҡан аҡыл эйәһе..."*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№1 (575)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Һынауҙар аша үттек,

һынауҙар дауам итә...



3

### Оло Иҙел далалары башҡорттары



7

### Балаңға әүрәгән барҡылдаҡ кеүек...



8-9 яҡты киләсәккә ышанып йәшәйбеҙ

### Яҙмыш тигән арбаларҙа...

елдән етеҙ елербеҙ



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Аттың иң тоғро юлдашы һәм дуҫы булыуын башҡорт онотмаһымы икән әле?

***Риф ИҪӘНОВ, Өфө ҡалаһы Калинин районының "Трал"муниципаль унитар предприятиеһы генераль директоры:*** Ат, ысынлап та, һәр бер башҡорт ир-егетенең йөрәгендә. Халыҡ һүҙҙәре менән әйтһәк, "Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр"- был хәҡиҡәттә бөгөн башҡорт онота баралыр, тип әйтә алмайым, сөнки яуҙа - яуҙаш, юлда - юлдаш, донъя көткәндә ярҙамсы булған атты онотоу мөмкин булмаған хәл. Ат - ул башҡортлоҡтоң айырылмаҫ бер сифаты, уларҙың яҙмыштары быуаттар төпкөлөнән бергә үрелеп килә. Дөрөҫ, бөгөнгө көндә һәр кемгә лә ат аҫырарға мөмкинлек тә юҡтыр, уның ҡарауы, ауылдарҙа хәҙер фермерҙар эшләй, өйөр-өйөр үк булмаһа ла, тиҫтәләгән баш йылҡы аҫырап, тоҡомсолоҡто үҫтереп, ҡымыҙын, ҡаҙылыһын яһап, быҡа тиғән итеп йәшәйҙәр. Айырыуса Ишембай, Баймаҡ, Хәйбулла, Ейәнсура, Мәләүез, Иглин, Дыуан, Балаҡатай, Илеш, Дүртөйлө райондарында йылҡы тотоусылар күп.

Ат аҫырау өсөн әллә ни сығымдар ҙа кәрәк түгел, уйлап ҡараһаң. Киреһенсә, ат үҙе ашата, кейендерә кешене, уға аҡса эшләргә булышлыҡ итә. Техника заманында ат нимәгә, тигән кешеләргә лә яуабым әҙер: атҡа запас деталдәр ҙә, солярка, бензины ла кәрәк түгел. Беҙҙең быуын атайҙарҙан күреп, атҡа ылығып үҫте, шуға ла беҙҙең өсөн ат - ул йөк ташыусы көс бирәмегә генә түгел, ә бөйөк үә илаһи йән эйәһе, беҙгә илһөйәрлек, көс һәм рух биреүсе күңел ҡанатландырғыс поэтик образ да ул. Эпостарыбыҙҙы ғына иҫкә төшөрөгөҙ әле: ат һәр саҡ башҡорт батырының тоғро дуҫы, юлдашы; батырҙарыбыҙ йәйәүле булып түгел, ә атҡа атланған килеш күҙ алдына килә. Әлеге үҫмерҙәргә, егеттәргә ҡарайым да, бошонон ҡуям; уларҙың күбеһе машина, матай йөрәтөргә белһә лә, ат егеп тугарырға ла, атҡа атланып, һыбай елдерергә лә булдыра алмай...Шөкөр, ҡала тыуып үҫһәләр ҙә, ике улым да ат йәнлеләр. Олоһо Рәфис Ишембай районында дүрт балаһы, килен менән ауылда йәшәйҙәр, йылҡы үрсетәләр. Икенсе улым Айҙар Иглин районында утыҙлаған баш йылҡы аҫырай. Мин улар менән ғорурланам һәм улдарымды ысын башҡорт ир-егеттәре итеп тәрбиәләй алыуым менән бәхетлемен.

(Дауамы 2-се биттә).

## ЙЫЛҠЫ ЙЫЛЫ

*Аҡ күбектәй күперелтеп,*
*Өйөрөлтөп юл ҡарын,*
*Туҙғытып көмөш ялдарын,*
*Килдең, әкиәт толпары.*
*Сәғәт сың-сың һуҡҡан саҡтыр*
*Әкиәттең ысыны:*
*Сың-сың итә сәғәт түгел,*
*Тояҡтарыңдың сыңы.*
*Ялдарыңды елкеткәндә,*
*Һибелеп ҡала ҡар-туҙан;*
*Тояҡтарың бейеткәндә,*
*Уйнаҡлайһың ярһыуҙан.*
*Ялдарыңдан һибелгән ҡар*
*Сафлыҡ булып яғылһын,*
*Үрәпсеп тә ярһыуҙарың*
*Һәр йөрәккә ҡағылһын.*
*Ир ҡанаты ат була, тип,*
*Әйтмәгәндәр тигенгә.*
*Елер сакта үшәнләшеп*
*Ҡала күрмә тибендә.*
*Һөләк төҫлә уйнаҡлап,*
*Бәйгеләрҙә елеп ҡал,*
*Өйөр туплар саҡтарыңдың*
*Ҡәҙерҙәрен белеп ал.*
*Ҡолаҡтарың ҡайсылап бер,*
*Һай, кешнәп ҡалыуҙарың!*
*Ҡороҡ һалып, нуҡталағас,*
*Баҫылыр ҡарыуҙарың.*
*Куптәргә бит кәрәк әле*
*Толпар түгел - йөк аты,*
*Еккеләргә ҡамыт әҙер,*
*Ҡамсы уйнар шыйлатып.*
*Сығынсылып китә күрмә,*
*Аҡ күбеккә батҡанда.*
*Беҙ үҙебеҙ ғүмер буйы*
*Кәм түгелбеҙ аттан да...*
*Сәғәт сың-сың һуҡҡан саҡтыр*
*Әкиәттең ысыны,*
*Сыңҡ-сыңҡ иткән сәғәт түгел-*
*Тояҡтарыңдың сыңы.*
*Көмөш ялдарың уйнатып,*
*Һин үтеп тә китерһең,*
*Кук дуғаңда Ай ҡыңғырап,*
*Беҙҙе әсир итерһең.*
*Тояҡтарың сыңҡылдар ҙа*
*Ялҡайҙарың йылҡылдар.*
*Арба, сана юлы булып*
*Һыҙылһынсы йыл-ҡылдар!*
*Ялыңдың тик бер бөртөгән*
*Ҡалдыр миңә - һаҡлайым,*
*Һыҙғыртып, бик ауыр саҡта,*
*Саҡырырмын, малҡайым!*

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**



Һүрәттә: Баймаҡ районы "Аҡъял" ипподромының республика һәм Рәсәй кимәлендәге бик күп ярыштарында еңеү яулаған "Клайпеда" исемле орел юртағы һәм районның "Ирәндек" бейеү ансамбле бейеүселәре. Наил Юнысов фотоһы.

ӘЙҘӘ, ГӘЗИТ УҠЫЙЫҠ!

# АҠҺАҠАЛДАР, АҒИНӘЙҘӘР АҠЫЛЫ УНДА




**"Киске Өфө" гәзите башҡа матбуғат баҫмаларынан үҙенең милли йөҙө, үҙенең стиле, үҙенең теле, үҙенең концепцияһы булыуы менән айырылып тора. "Киске Өфө" тип аталһа ла, уны өфөләләр генә уҡымай, бөтөн Башҡортостан, хатта республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ ҙә яҙҙырып та, шулай уҡ интернет-сайтҡа инеп тә уҡый тип беләм.**

"Киске Өфө" гәзите тарихты, көнүҙәк мәсьәләләрҙе, милләттең борсолоуҙарын, хәстәрҙәрен сағылдырыусы мәҡәләләре менән айырылып тора. Шулай уҡ мәғариф, мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт йәки башҡа өлкә булһынмы, бар тарафта үҙенең үҙенсәлекле фекерен белдерә барыуы менән уҡымлы ул. Миңә ҡалһа, күп кеше, "Киске Өфө" теге йәки был ваҡиғаға үҙенең мөнәсәбәтен нисек белдерер икән, уның ҡарашы нисек икән, тип, гәзиттең сираттағы һанын көтөп ала. "Киске Өфө"лә донъя күргән фекер халыҡ араһында бик тә үтемле һәм ул һәр кемгә оло инәйҙәр, аҡһаҡалдар кәңәше кеүек тәьҫир итә. Борон аҡһаҡалдар, ил ағалары, сәсәндәр төрлө майҙандарға сығып, халыҡтың кисерештәрен түрәләргә, властағыларға еткерә килгән. Ә бына бөгөн, минеңсә, тап ошо вазифаны - аҡһаҡалдарҙың, ағинәйҙәрҙең аҡыллы, төплө фекерҙәрен халыҡҡа ла, властағыларға ла еткереүҙе "Киске Өфө" башҡарған кеүек.

Баҫманың 10 йыллығына арналған юбилей кисәһендә лә ҡатнашырға тура килгәйне, унда ла халыҡтың гәзитте ни тиклем яратыуына, уны үҙенеке итеп таныуына һәм һәр һанын көтөп алыуына инанырға, үҙ күҙҙәрем менән күрергә тура килде. Алла бойорһа, баҫманың киләсәге яҡты, уҡыусылары күп булыр тип уйлайым һәм, мөмкинлектән файҙаланып, "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларын, редакция хеҙмәткәрҙәрен Яңы йыл менән ихлас ҡотлайым. Яңы йылда ла Башҡортостаныбыҙ, милләтебеҙ ныҡлы, көслө, һау-сәләмәт булып, киләсәккә яҡты йөҙ менән ҡарар, тигән ышаныста ҡалам.

**Хөрмәт ҮТӘШЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Аттың иң тоғро юлдашы һәм дуҫы булыуын башҡорт онотманымы икән әле?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Хәлис КИЛДЕҒОШОВ, "Аҡбуҙат" ипподромы дәүләт унитар предприятиеһының баш ветеринария табибы, БР-ҙың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре:*** Кешелек йәмғиәтендә ҡайһы халыҡтың аты булһа, шул халыҡ ҡына үҙен еңеүсе итеп тойған, тик шул халыҡ ҡына үҙен халыҡ итеп тойған. Беҙҙе боронғо дәүерҙәрҙән алып башҡорт итеп танытыусы - ул ат. Башҡортостан йылҡы малы һаны буйынса Рәсәйҙә беренсе урында тора. Бәйгеләрҙә уҙышыу өсөн сабыш аттары әҙерләү, ҡымыҙ, ит етештереү өсөн йылҡы аҫыраусы фермер һәм шәхси хужалыҡтар беҙҙә байтаҡ. Шул уҡ ваҡытта йылҡысылыҡ менән дәүләт кимәлендә шөғөлләнеү, БР Президенты тәҡдиме буйынса "Башҡорт аты", "Башҡорт ҡымыҙы" брендтарын булдырыу буйынса ла эш алып барыла. Республика дәүләт атлыҡсаһы менән 119-сы ат заводы бына ошо йүнәлештә эшләй ҙә инде. Башҡорт аттарын үрсетеү, тоҡомсолоҡто һаҡлау, ҡымыҙ һәм йылҡы ите етештереү менән шөғөлләнә был предприятиелар. Беҙҙең "Аҡбуҙат" ипподромы иһә ана шул башҡорт тоҡомло аттарҙы һынау, уларҙы сабышҡа әҙерләү һәм халыҡҡа күрһәтеү бурысын атҡара. Ат ятаҡан кеше беҙгә килеп, һыбай йөрөү мәктәбендә шөғөлләнә ала. Ҡайһы бер хәстәрлекле ата-әсәләр балаларын килтереп, һыбай йөрөтөргә өйрәтә, ләкин, үкенескә күрә, баш ҡалала йәшәгән башҡорттарҙы һәм уларҙың балаларын мин бында әллә ни осратҡаным юҡ. Ауырыу балалар өсөн беҙҙә махсус ипотерапия мәктәбе лә эшләй. Ҡайһы бер райондарҙа ла бәләкәй ипподромдар бар. Хужалығында ат тота алмаған кеше шунда балаларын алып барып, уларҙы ат менән дуҫлаштырға, һыбай йөрөргә өйрәтә ала. Баймаҡта -"Аҡъял", Мәләүездә - "Толпар", Дүртөйлөлә -"Арғымаҡ", Илештә -"Ҡара юрға" һәм Дыуан ипподромдары эшләй. Бөгөнгө шарттарҙа уларҙы һаҡлап алып ҡалыу - үҙе бер ҡаҙаныш, тик улар буш тормаһын, халыҡ унда йөрөһөн, шөғөлләнһен ине. Әйткәндәй, "Аҡбуҙат" ипподромында беҙ аҙна һайын ике тәгәрмәсле еңел арбаларҙа сабыш аттары ярыштары, юртаҡтар бәйгеһе үткәреп киләбеҙ, теләге булғандар ғаиләләре менән килеп, башҡорт аттарына - толпарҙарға, дөлдөлдәргә һоҡлана, ҡала балаларында уларға ҡарата һөйөү тәрбиәләй ала.

***Салауат МӨХӘМӘТШИН, С.Мифтахов исемендәге Баймаҡ район журналистары премияһы лауреаты:*** Беҙҙең "Октябрҙең 50 йыллығы" исемендәге колхоз заманында бик ҙур һәм ҡеүәтле хужалыҡтарҙың береһе булды. Ул Ҡолсора, Үрге Иҙрис, Түбәнге Иҙрис, Муллаҡай ауылдарын берләштерә. Элекке үк ҡолас булмаһа ла, бәхеткә, беҙ уны һаҡлап ҡала алдыҡ, хәҙер ул "Октябрь" исемен йөрөтә, ләкин, үкенескә, йылҡысылыҡ тармағы менән шөғөлләнмәй. Уның ҡарауы, әле әйтеп кителгән дүрт ауылдың шәхси хужалыҡтарында ҡара иҫәп менән 500-ләп баш йылҡы барҙыр, тип әйтә алам. 3, 4, 5 баш йылҡы аҫыраған уңған кешеләр бар беҙҙә. Ә бына Үрге Иҙристә бер уҙаман йылҡысылыҡ фермер хужалығы тота. Тәүҙәрәк ҡолонло бейәләре һаны егермеләп баш булһа, хәҙер байтаҡҡа артты. Йәй көндәре был уңған егет ҡымыҙ етештереп һата. Ошо шифалы эсемлек менән тирә-йүн ауыл халҡын ғына тәьмин итеп ҡалмай, Темәс баҙарына алып сыға. Башҡа яҡтарҙан килеп алыусылар ҙа күп. Борондан килгән ата-бабаларыбыҙ кәсебен дауам иткән был уҙаманға афариндан башҡа ни әйтәһең инде! Теләге, елкәһе бар кеше бер ҡасан да эш юҡ, тип ятмай. Ә инде башҡортмон, тигән ир-азаматҡа атһыҙ донъя көтөү, бигерәк тә ауыл ерендә, һис бер төҫ түгел, минеңсә. Уның өсөн бер ниндәй сығым кәрәкмәй: ат үҙен үҙе туйындыра, хужаһын да үҙе аҫырай ул, белеп тәрбиәләгәндә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# МАШИНАМДЫ...

## ҡуртымға бирәм



**Һәр кем тәмле ашарға, матур кейемдәр кейергә, балаларын етеш тормошта йәшәтергә теләй. Кемгәлер бының өсөн эш хаҡы ла етә, ә икенселәргә ғаилә бюджетын тулыландырыу өсөн башҡа төрлө юлдар ҙа эҙләргә тура килә. Мин - икенселәр иҫәбендә һәм гәзит уҡыусылар менән кеҫәмде бер аҙ ҡалынайтырға ярҙам итеүсе тәжрибәм менән бүлешкем килә.**

Бөгөнгө көндә һәр кемдең тиерлек еңел автомобиле бар. Ә ҡайһы бер ғаиләләрҙә иһә уларҙың һаны икәүгә, хатта өсәүгә барып етә. Кем өсөндәр автомобиль тиҙ хәрәкәт итеү сараһы, икенселәргә матур уйынсыҡ булһа, кемгәлер ул өҫтәмә аҡса эшләү сараһы ла булып тора. Мин дә үҙемдең "тимер ат"ымды ошо маҡсатта файҙаланам. Минең 2011 йылда сыҡҡан ВАЗ-2114 маркалы һәйбәт техник тороштағы машинам бар. Ғаиләм менән берәй ергә барырға кәрәк булмаһа, мин уны ҡуртымға бирәм. Ҙур ҡалала такси хеҙмәтенә ихтыяж юғары. Ләкин үҙем төп эшемдән һуң тағы ла руль артына ултырғым килмәй, ә кемдәндер, киреһенсә, теләге бар, ләкин мөмкинлеге юҡ. Шуға күрә, ҡуртымға машина алырға теләүселәр етерлек. Шулай уҡ дуҫтарым да минең машина менән йыш файҙалана. "Машинаңды йәлләмәйһеңме?" - тип һораусыар күп. Минеңсә, машина тик тормаҫҡа тейеш. Ғөмүмән, ошо ҡағиҙәне бөтә нәмәгә ҡарата ла ҡулланам: кейем эленеп тормаҫҡа, ә кейелергә, донъя кәрәк-ярағы өсөн алынған әйбер тотонолорға, аҙыҡ-түлек оҙаҡ һаҡланмаҫҡа, ә ашалырға тейеш. Шуға күрә "тимер ат"ымды сит-яттар ҡулына тоттороп ебәреү миңә ауыр түгел. Шулай уҡ был өлкәлә өс йыл "өйөрөлөүем" машинамды ҡуртымға алыусылар араһында даими клиенттар ҙа барлыҡҡа килтерҙе. Уларға мин машинамды бер шикһеҙ биреп ебәрәм. Бына ошондай ысул менән мин ғаилә бюджетын тулылындарыуға үҙ өлөшөмдө индерәм.

Ҡулыма бер ҡәләм алғанда шулай уҡ яҡын танышымдың да өҫтәмә килем килтереүсе үҙенсәлекле ысулы хаҡында әйтеп үтмәксемен. Ул да ҡуртымсылыҡ менән шөғөлләнә. Ләкин минән айырмалы рәүештә еңел автомобилен түгел, ә төҙөлөштә кәрәкле ҡоралдарҙы (инструменттарын) ҡуртымға бирә. Бензинлы быҫҡы (бензопила), дрель, перфоратор һәм башҡа ошондай ҡорамалдарҙың хаҡы тешләшә һәм һәр береһен һатып алыу мөмкинлеге күп осраҡта юҡ. Нәҡ ошондай саҡта танышымдың хеҙмәте ҙур һорау менән файҙалана.

**Сәлих ИШМЫРҘИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йыл аҙағында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика парламенты депутаттары алдында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны. Тәҡдим ителгән документта яҡын ваҡыт арауығына һәм алыҫ киләсәккә республиканың төп йүнәлештәре билдәләнгән. 2012 йылда ноябрҙә тәҡдим ителгән бынан алдағы Мөрәжәғәтнамәһендә Рөстәм Хәмитов, граждандарҙың көнкүрешен яҡшыртырға һәм улар өсөн лайыҡлы йәшәү шарттары булдырырға ынтылыу яҡын аралағы төп бурыс, тип әйткәйне. Сираттағы Мөрәжәғәтнамәһендә лә кешеләрҙең тормошон яҡшыртырға ынтылыуҙы яҡын киләсәккә бурысты билдәләүсе йүнәлеш тип атаны.

✓Башҡортостан Президенты Мөрәжәғәтнамәһендә билдәләнеүенсә, әле ауыл хужалығы комплексында дөйөм һалыуҙар күләме менән 702 миллиард һумдан ашыу 18 эре проект тормошҡа ашырыла. 2013 йылда 7 миллиард һум самаһы аҡса ауыл хужалығына ярҙам итеүгә йүнәлтелде. Байтаҡ средстволар федераль бюджеттан йәлеп ителде. "500 ферма" программаһы яҡшы импульс бирҙе. Уның арҡаһында республиканың 130 фермаһында яңыртыу һәм ҡорамалдар менән йыһазландырыу буйынса эштәр бара йәки тамамланған.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә "Эшләүсе әсәйҙәр өсөн иң яҡшы предприятие" IV Республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләнеләр. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса Республика өс яҡлы комиссияһының быйылғы йомғаҡлау ултырышында үткәрелде. Бюджет учреждениелары араһында Өфөнөң 13-сө ҡала клиник дауаханаһы "Эшләүсе әсәйҙәр өсөн иң яҡшы предприятие" конкурсы лидеры булды. Икенсе урын Өфөнөң 17-се ҡала балалар клиник дауаханаһына бирелде.

✓Башҡортостанстат Волга буйы федераль округы субъекттарында былтырғы йыл аҙағына ҡарата тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә сағыштырмаса хаҡтар тураһында мәғлүмәт баҫтырҙы. Күп күрһәткестәр буйынса беҙҙең республика хаҡтар рейтингының уртаса кимәле, ҡайһы бер позицияла иң түбән хаҡтар менән айырылып тора. Мәҫәлән, иң арзан тауыҡ ите беҙҙә етештерелә. Трамвайҙа ла иң арзан хаҡҡа йөрөйбөҙ икән. Өйҙәрҙе йылытыу, йылы һыу һәм электр энергияһы менән тәьмин итеү өсөн дә башҡалар менән сағыштырғанда аҙыраҡ түләйбеҙ булып сыға.

*ҮТКӘН ЙЫЛҒА БЕР ҠАРАШ*

# ҺЫНАУҘАР АША ҮТТЕК,

## һынауҙар дауам итә…

**Үтеп киткән Йылан йылын ҡыҫҡаса байҡағанда, 2013 йыл Рәсәй өсөн сағыштырмаса уңышлы булды, тип әйтергә булалыр. Донъя кимәлендә Рәсәй Президенты Владимир Путин тырышлығы һәм оҫталығы менән атҡарылған сәйәсәт арҡаһында ике мөһим ваҡиға беҙҙең илебеҙҙең абруйын һиҙелерлек арттырҙы.**

Беренсенән, ғәрәп дәүләттәрендә барған сыуалыштарҙы Рәсәйҙең Яҡын Көнсығышындағы форпосында - Сүриәлә - туҡтатып булды. Был, бәлки, ваҡытлыса ғына күренештер, әммә күп эксперттар фекеренсә, был еңеү донъя сәйәсәтендә етди тектоник үҙгәрештәргә килтерҙе. Тәү сиратта, Израилдең, Сәғүд Ғәрәбстанының һәм Ирандың быға тиклем тотоп килгән роле ҡырҡа үҙгәрҙе.

Икенсе мөһим еңеү - Украина арҡаһында Рәсәй һәм Көнбайыш, тәү сиратта, Евросоюз араһында барған тартҡылыш беҙҙең файҙаға тамамланды шикелле. Рәсәй бында Украинаны ҡотҡарыу өсөн һиҙелерлек финанс сығымдарға барырға мәжбүр булды: Резерв фондтарынан миллиардлаған долларҙы кредитҡа бирергә һәм газға хаҡты байтаҡҡа төшөрөргә тура килде.

Ошо ике аҙым арҡаһында Владимир Путин донъялағы иң көслө сәйәсмән тип табылды. Был еңеү уның абруйын һиҙелерлек күтәрҙе һәм уға халыҡ-ара эшмәкәрлектә генә түгел, Рәсәй кимәлендә лә тағы бер мөһим еңеүгә өлгәшергә форсат бирҙе. 2013 йыл Рәсәй дәүләте өсөн күҙгә ташланып бармаған, әммә бик мөһим һынылышҡа булышлыҡ итте. Баҙар иҡтисады реформалары үҙенең бер этабын тамамланы. Был һығымтаны Президент Владимир Путиндың Рәсәй парламентына Мөрәжәғәтнамәһе менән танышҡас яһарға була. В. Путин президент булараҡ яһаған был унынсы сығышын, бынан алдағыларынан айырмалы, яңы фундаменталь принциптарҙа нигеҙләнә. Ысынлап та, бынан ике тиҫтә йылдан артыҡ башланған либераль реформалар "ҡырағай капитализм" төҙөүгә йүнәлтелде, ошо генераль линия йәмғиәттә ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуға ҡарамаҫтан, гел генә атҡарылып килде. Әммә ошо



йылдарҙа Рәсәй иҡтисады ике тапҡыр (1998 йылда һәм 2008 йылда башланған) көрсөккә дусар булды. Беренсеһенән сағыштырмаса "еңел һәм тиҙ генә" дефолт аша ҡотола алһаҡ, икенсеһе бына инде биш йыл дауам итә һәм уның осо-ҡырыйы күренмәй. Рәсәй хөкүмәте үҙенең иҡтисади үҫеш министры Улюкаев теле менән "беҙҙең иҡтисади үҫеш темптары донъя кимәленән түбәнерәк буласаҡ", тип танырға мәжбүр булды. Был Рәсәй тарихында булмаған ваҡиға: быға тиклем дәүләтебеҙҙең бер етәксеһе лә бындай пессимистик вәғәҙәләр бирмәй торғайны. Барып сығамы, юҡмы, әммә улар йә "1980 йылда совет халҡы коммунизмда йәшәйәсәк", йә "2000 йылда һәр совет ғаиләһенең айырым торлағы буласаҡ", тип өмөтләндерә торғайны. Бына, ниһайәт, либераль ҡараштарға нигеҙләнгән сәйәсәт бар донъя алдында үҙен фаш итергә мәжбүр булды. Быны гайдарономиканың финалы тип ҡыуанырға кәрәк ине лә ул, тик властың төрлө кимәлендә ошондай ҡарашлы вәкилдәрҙең һаҡланып килеүе генә эсте бошора.

Владимир Путин асыҡтанасыҡ "Минең күрһәтмәләрем йә үтәлмәй, ә үтәлһә, халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырып үтәлә", тип әйтергә мәжбүр булды. Ысынлап та, уның инаугурацион указдары төрлө һылтауҙар табылып, йыл ярымдан ашыу үтәлмәй килде. Дмитрий Медведев етәкләгән Рәсәй хөкүмәте "уларҙы үтәү өсөн биш-алты процентлыҡ үҫеш темптары кәрәк", тип ышандырырға маташты. Ысынында, хөкүмәт бюджет өлкәһендә эшләгән хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын олигархтар кеҫәһе иҫәбенә арттырғыһы килмәне. Бының менән Д.Медведев үҙен олигархтар һағында һәм улар көсө менән ҡуйылған сәйәсмән итеп күрһәтте. Уның президент булып китеүе лә ошоноң менән бәйле булып сыҡты.

Шуныһы ҡыҙыҡ, Медведев етәкләгән хөкүмәт нефткә һәм газға юғары хаҡтар һаҡланып килгән уңайлы шарттарҙа Рәсәй иҡтисадын көрсөктән сығара алманы. Уның өсөн иҡтисади паразит булып Рәсәй тәненә сат йәбешкән олигархтарҙың аппетитын әҙерәк ауыҙлыҡлау ҙа етә ине. Йылына ситкә һатылған 16 триллион һумлыҡ нефть һәм газдың 10 триллионы олигархтарҙың кеҫәһенә төшөп ятҡас, бер генә иҡтисад та был көрсөктән сыға алмаясағы көн кеүек асыҡ бит инде. Әммә беҙҙең хөкүмәт быны күрергә лә теләмәне. Шуға ла Владимир Путин үҙенең сығышының төп пункттарының береһе итеп "деофшоризацияны" ҡуйҙы. Беҙҙә табыш алған компанияларҙың күбеһенең Рәсәй юрисдикцияһы аҫтында эшләргә тейеш булыуы күптән аңлайышлы булһа ла, был аҙымды яһарға Владимир Путинға тик 2013 йылда ғына форсат тыуҙы. Конституция буйынса Рәсәй халҡыныҡы булып торған сеймал халыҡ мәнфәғәте өсөн хеҙмәт итергә тейеш тә инде. Әгәр ҙә ошо маҡсатты Владимир Путин президент мөҙҙәте тамамланғансы атҡарып сыға алһа, Рәсәй дәүләтенең киләсәге бар икәненә ышанырға булыр.

Быға тиклем дәүләт етәкселегенең иғтибарынан ситтә торған Рәсәй Фәндәр академияһы ғалимдарының, тәү сиратта Глазьев, Некипеловтарҙың, ҡараштарының еңеп сығыуы ла ҡыуандырҙы. Гел генә Юғары иҡтисади мәктәп (ВШЭ), Гайдар институты ғалимдары биреп килгән "иң дөрөҫ" кәңәштәрҙең халыҡ алдында тамам фаш булыуын бер миҫал менән иҫбатлағы килә. Яңыраҡ ВШЭ, әйткәндәй, уны Е.Гайдарҙың уҡытыусыһы Евгений Ясин ойошорҙо һәм етәкләп килә, халыҡта ҙур ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырған Берҙәм дәүләт имтиханын бирә алмағандарҙан 1500 һумға уны ҡабаттан ҡабул итергә әҙерлеге тураһында хәбәр итте. Бына һиңә! Нисә йыл халыҡты БДИ иң прогрессив ысул тип ышандырып килделәр. Баҡтиһәң, был киләсәктә үҙҙәренә аҡса һуғыу ысулы ғына булған икән. Юҡҡа ғына Д.Медведев бынан 2-3 ай элек, Газпром һәм Роснефть кеүектәр үҙҙәренең вуздарын булдырырға тейеш, тип әйтмәне - олигархтар әкренләп булған вуздарҙы (бында хәҙер аҡса бар) хосусилаштырырға тейеш. Автомәктәптәр, техник хеҙмәтләндереү үткәреүсе дәүләт ойошмалары ла һ.б. шәхси ҡулдарға күсерелде, мәктәптәр, дауаханалар, фән ойошмаларын да "һөҙөмтәле менеджерҙар" етәкләргә тейеш, тигән фекер тамыр йәйә. Бөтә нәмәне дәүләт ҡарамағынан шәхси ҡулдарға таратып бөтһәк, Рәсәйгә тиҙҙән президент тигән етәксе лә кәрәкмәйәсәктер. Юҡҡа ғына Дәүләт Думаһында, Енәйәт кодексына бойороҡтарҙы үтәмәгән өсөн яза индереү тураһындағы статья индерергә кәрәк, тип әйтмәйҙәрҙер. Дәүләт етәкселәре ҡабул иткән ҡарарҙарҙың үтәлеү кимәле бик түбәнгә төштө бит инде. Эксперттар иҫәпләүенсә, инвесторҙарҙы Рәсәйҙәге бизнес климатына ҡарағанда халыҡтың белем кимәленең, квалификацияһының бик түбәнәйеүе борсой икән. Быны мәғариф өлкәһендәге үҙгәртеп ҡороуҙарҙың һөҙөмтәһе тип ҡабул итергә кәрәк. БДИ-ның төп маҡсаты - уҡыусыларҙы тик баҙар шарттарында һатып алыусы, ҡулланыусы булараҡ ҡына әҙерләүгә йүнәлтелеүен танырға ваҡыт. Юҡҡа ғына БДИ тестары витрина алдында тауар һайлап тороусы кеше хәрәкәттәрен хәтерләтмәй: бер нисә варианттан һин тик тейешлеһен генә һайлай ала белергә тейешһең. Үҙаллы фекерләргә өйрәтеүсе иншаларҙан баш тартыу ҙа ошоға йүнәлтелгән булып сыҡты. Ниһәйәт, "баҙар шарттарында уҡыусы резюме төҙөй белһә, шул етте", кимәленә төшөрөүсе белем биреү системаһы ҡоролғанын аңланылар, буғай.

Рәсәй хөкүмәтенең тик олигархтар, эре капитал һағында торғанына миҫал булып эшҡыуарлыҡҡа, ябай халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән бер нисә ҡарарын һыҙыҡ өҫтөнә алып үтергә кәрәктер. Беренсенән, эшҡыуарҙарҙа һалымды ике тапҡырға арттырыу һөҙөмтәһендә яҡынса 400 мең кеше үҙ эшен ябырға мәжбүр булды. Икенсенән, эре капиталға ғына файҙалы булып торған арзанлы мигранттар хеҙмәтен ҡулланыуҙы өҫтөн күреү һаман да дауам итә. Киләһе йылға мигранттарға рәсми рәүештә 1 миллион 400 мең өҫтәмә квота биреү ҡаралды. Тимәк, беҙҙең ошонса кеше эшһеҙ ҡаласаҡ, ә башҡалары түбән эш хаҡына риза булырға мәжбүр буласаҡ. ВТО-ға инеү ҙә Рәсәй өсөн әллә ни уйланып бөтөлмәйенсә хәл ителде шикелле. Һәр хәлдә, ауыл хужалығындағы барған үҙгәрештәр ҡыуандырып етмәй. Аҙыҡ-түлек импорты былтырғыға ҡарағанда 4 процентҡа артты, эре мөгөҙлө малдарҙың иҫәбе 2,6 процентҡа, һөт етештереү 4 процентҡа кәмене.

Нисек кенә булмаһын, 2013 йылды баһалағанда беҙҙең иғтибарҙан бер бик мөһим күрһәткес ситтә ҡалырға тейеш түгел. Ул да булһа, Рәсәйҙең оборонаһын нығытыуға йүнәлтелгән сараларҙы әйтеп үтмәй булмай. Яңы министр Сергей Шойгу тарафынан үткәрелгән ҙур-ҙур хәрби учениелар, сафҡа индерелгән яңы ҡорал системалары, Калининград өлкәһендә урынлаштырылған "Искәндәр"ҙәр юҡҡа түгелдәр. Был тик бер нәмәне генә дәлилләй: яҡын киләсәктә Рәсәйҙе бик етди һынауҙар көтә. Һаҡ булайыҡ, һау булайыҡ.

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Яңы йыл алдынан илдең бөтә кимәлдәрҙәге һайлау комиссиялары вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе. Саҡырылғандар иҫәбендә Өфөнөң 185-се участка һайлау комиссияһы рәйесе Ғаяз Хисмәтуллин да булды. Осрашыуҙа һайлау системаһының асыҡлығын арттырыу мәсьәләләре тикшерелде. Владимир Путин, беҙҙең һайлау комиссияларында 46 партия вәкилдәре эшләй, тип билдәләне һәм һайлау кампанияларында ҡатнашыусы партияларҙы консультациялау, ғәмәлдәге ҡануниәтте аңлатыу буйынса эште хупланы.

✓Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто йыллыҡ эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһаны. Учреждение директоры Вельмир Хәбибрахман улы Аҙнаев билдәләүенсә, былтыр тарихи-мәҙәни үҙәктәр тарафынан 931 сара үткәрелгән, уларҙа барлығы 117 меңләп кеше ҡатнашҡан, ә милли-мәҙәни үҙәктәр тарафынан 31 меңләп кеше ҡатнашлығында 436 сара үткәрелгән. Ул шулай уҡ был сараларҙың гранттар ярҙамында финансланыуы тураһында ла әйтеп үтте. Мәҫәлән, былтыр БР Президентының 200-әр мең һумлыҡ грантына ҡырғыҙ һәм мари милли-мәҙәни үҙәктәре лайыҡ булған.

✓Яңы йыл каникулдары көндәрендә балалар араһында йығылып имгәнеүҙәр, төрлө шартлатҡыс, петардалар утына бешеүҙәр арта. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ата-әсәләрҙе һаҡ булырға саҡыра һәм бәхетһеҙлек осрағында Өфөлә эшләүсе травмпункттарҙың адрестарын хәбәр итә: Орджоникидзе урамы, 15-се йортта - 4-се; Жуков урамы, 18 - 5-се; Аксаков урамы, 62 - 6-сы травмпункт. Улар штат режимында иртәнге 8-ҙән киске 22 сәғәткә тиклем эшләй. Тиҙ ярҙам машинаһын саҡырыу - 03 йәки 112 телефоны буйынса.

✓Өфө районы Жуков ауылының яңы микрорайонында 160 урынлыҡ балалар баҡсаһы асылды. Ике ҡатлы кирбес бинаны эмблема - балалар баҡсаһының исеме һәм символы булған ҡарлуғас биҙәй. Бында һигеҙ төркөм урынлашасаҡ. Улар барыһы ла уңайлы йыһаздар менән комплектланған. Процедура, изолятор бүлмәһе менән медицина кабинеты, аҙыҡ-түлек блоғы, кер йыуыу бүлмәһе йыһазландырылған. Учреждение территорияһында газ мини-ҡаҙанлығы төҙөлгән. Асыҡ һауала уйын һәм спорт майҙансыҡтары ла бар.

**“Башинформ”дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МИҘАЛ ЮҠҠА СЫҒАРЫЛДЫ

**Мәктәпте 2014 йылда тамамлаясаҡ уҡыусыларҙың күбеһе алдынғылар өсөн алтын миҙалдың да, көмөш миҙалдың да булмаясағын әле генә белгәндәр, моғайын. Улар лайыҡ булмағандан түгел, әлбиттә - миҙалдар юҡҡа сығарылды.**

Был 2013 йылдың сентябренән көсөнә ингән "Мәғариф тураһында"ғы закондың бер яңылығы. Депутаттар миҙалды файҙаһыҙ, тип тапты, сөнки юғары уҡыу йортона ингәндә ул бер ниндәй ташлама бирмәй. Фәҡәт Берҙәм дәүләт имтиханы менән олимпиадалар һөҙөмтәләре генә иғтибарға алына.

Ә миҙал өсөн ташламаларҙы юҡҡа сығарыуға РФ Мәғариф һәм фән министрлығы баҫып сығарған статистика мәғлүмәттәре мәжбүр итә. Шуға ярашлы, бер-ике йыл элек Мәскәү өлкәһендә - һәр 253 уҡыусы, Сахалинда - һәр 595, ә Ҡабарҙы-Балҡар төбәгендә һәр 18 уҡыусының миҙалға дәғүә итеүе асыҡлана! Бында белем кимәленең түгел, ә бәйләнештәрҙең беренсе урынға сығыуы аңлашылмаймы инде?

Шулай итеп, быйылдан башлап иң һәләтле уҡыусыларға аттестат отличие билдәһе менән тапшырыласаҡ. Биҙәлеше яғынан улар ҡәҙимгеләренән айырылып торасаҡ. Шулай ҙа миҙал яҙмышы аҙағынаса хәл ителмәгән әле - төбәк властары үҙ өлгөләре буйынса миҙалдар эшләтеп, иң яҡшы уҡыусыларға уны тапшыра ала.

# "ҠЫШҠЫ ВАҠЫТ"ТЫ ҺАҒЫНҒАНДАР

**Дәүләт Думаһы, киләһе сессияһында уҡ сәғәт уҡтарын "күсерергә" вәғәҙә итеп, каникулға китте.**

Яңы йыл алдынан һәр эш көнө интектергес. Шуға күрә лә Дәүләт Думаһы депутаттары тиҙерәк төрлө закондар ҡабул итә һалып, таҙа намыҫ менән каникулға китеү яйын ҡарай. Ошо көндәрҙә генә булып үткән пленар ултырышта өсөнсө уҡыуҙа иң серле булып тойолған пенсия реформаһы тураһында закон ҡабул ителде. Пенсия нисек иҫәпләнәсәк һәм иң мөһиме- ул һумдарҙа күпме буласаҡ - депутаттарҙың күбеһе быны аңлай ҙа алманы. Бигерәк ҡатмарлы һәм хәйләле буласаҡ уның формулаһы.

Ә бына 2014 йылға иң мөһим бүләк итеп депутаттар яҙға әҙерлек мәсьәләһен ҡараны. Дәүләт Думаһының Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты ағзаһы О.Красильникова хәбәр итеүенсә, яҙғы сессияла рәсәйлеләргә сәғәт уҡтарын ҡайтанан "ҡышҡы ваҡыт" ҡа шылдырыу тураһында закон ҡабул ителәсәк икән. Ул Комитетҡа һайлаусыларҙан был хаҡта хаттар килеүе, рәсәйлеләрҙең даими рәүештә йоҡоһо туймауы, быйың кеше сәләмәтлегенә кире йоғонтоһо хаҡында һөйләнә.

ХӨКҮМӘТ УЛТЫРЫШТАРЫНДА



# ИҪКЕ ЙОРТТАН - ЯҢЫҺЫНА

**Республика йортонда граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү һәм 2017 йылға тиклем был бурысты тулыһынса үтәү программаһын тормошҡа ашырыу буйынса кәңәшмә үтте.**

Унда билдәләнеүенсә, һуңғы биш йылда Башҡортостанда һигеҙ адресы программа тормошҡа ашырылды, 7,5 млрд һум аҡса үҙләштерелде, шул иҫәптән 4,5 млрд һумға яҡыны Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды аҡсаһы иҫәбенә инә. Һөҙөмтәлә авария хәлендәге 600-ҙән ашыу йорттан кешеләр күсерелде, 16 мең самаһы кеше яңы торлаҡ алды.

- Рәсәй Президенты май айындағы указдарында һәм Мөрәжәғәтнамәһендә граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү проблемаһына иғтибар йүнәлтте. Ваҡыты билдәле: программаны 2017 йылдың 1 сентябренә тиклем үтәргә кәрәк, - тине Башҡортостан Президенты.

Был бурысты үтәү өсөн Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фондының эшмәкәрлеге 2017 йылға тиклем оҙайтылды. Рәсәй Хөкүмәтенең күптән түгел сығарған Бойороғона ярашлы, төбәктәрҙә авария хәлендә тип танылған торлаҡ фондынан граждандарҙы күсереү буйынса яңы төбәк адресы программаһын раҫлауҙы тиҙләтергә тейештәр. Башҡортостанда бындай торлаҡ 380 мең квадрат метр. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн 12 млрд һум самаһы аҡса кәрәк.

- 2014-2016 йылдарға был маҡсаттарға республика бюджетында 5,6 млрд һумдан ашыу аҡса планлаштырылған, - тине Рөстәм Хәмитов. - Тимәк, беҙгә программаның план өлөшөн үтәү өсөн тағы 6,3 млрд һум аҡса эҙләп табырға кәрәк.

Республика башлығы шулай уҡ баҙар хаҡынан кәмерәк хаҡҡа торлаҡ төҙөү мәсьәләһен дә ҡуҙғатты - бер квадрат метрҙың был хаҡын киләһе йылдан төбәк үҙе билдәләйәсәк.

# ЙӘШЕРЕН ЭШ ХАҠЫ КЕМДӘ?

**2013 йылдың икенсе кварталы йомғаҡтары буйынса Башҡортостан халҡының аҡсалата табыш структураһында 33,9 проценты - иҫәпкә алынмаған табыштар. Икенсе төрлө әйткәндә, халыҡтың йәшерен эш хаҡы, теркәлмәгән килеме.**

Республика халҡының аҡсалата табыш структураһында 30,7 проценты эш хаҡына тура килә, тип билдәләнеләр Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән Эш хаҡы буйынса бурыстарҙы түләү һәм хеҙмәт мөнәсәбәттәрен законлаштырыу мәсьәләләре буйынса республика координация советы ултырышында.

Ҡайһы бер тикшеренеүҙәр буйынса, 86 миллион эшкә яраҡлы рәсәйленең 48 миллионы легаль эшләй. Эшкә яраҡлы халыҡтың 44 проценты "күләгәлә" ҡала. Ә "күләгәләге" хеҙмәт баҙары күләмен баһалауы ҡатмарлы. Төрлө эксперт баһалауҙары буйынса, бөгөн Рәсәйҙә эш хаҡының 15 проценттан 44 процентҡа тиклеме "һоро" схемаларҙы ҡулланып түләнә.

- Кешеләр йыш ҡына ниндәй эш хаҡы алыуы тураһында уйланмай - "аҡмы", әллә "һоромо". Эш хаҡына дөрөҫ мөнәсәбәт идеологияһы тәрбиәләргә кәрәк, - тип иҫәпләй Лилиә Ғүмәрова. - Эш хаҡын конвертта алыусылар фатир һатып алғанда, түләүле медицина ярҙамы алғанда, түләп балалар уҡытҡанда, шулай уҡ банкта кредит алғанда һалымдарын тулы күләмдә кире ҡайтара алмай. Быға шулай уҡ ауырығанда бюллетенгә түләү һәм лайыҡлы пенсияны индерергә була.

Вице-премьер әйтеүенсә, ошо уҡ сәбәптәр арҡаһында урындағы бюджет физик шәхестәрҙең табышына һалымды алып еткермәй, Пенсия фондына, Дәүләт социаль һәм мотлаҡ медицина страховкаһы фондтарына түләүҙәр тулы күләмдә күсерелмәй.

Республика координация советында билдәләүҙәренсә, һалымды йәшереү ҡаҙнаға сикһеҙ ҙур зыян килтерә. "Күләгәле" иҡтисадта сит ил граждандарының роле лә ярайһы уҡ ҙур ғына.

"Башинформ".

Аһ-Аһ!

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫ БЕРЛӘШӘ

**Башҡортостанда яңы быуын инновацион күп профилле вуз барлыҡҡа киләсәк. Бындай ҡарар Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты менән М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының ғилми Советтары ултырыштарында ҡабул ителде.**

Яңы типтағы университет йәмғиәттең иҡтисади, социаль, гуманитар өлкәләре, шулай уҡ халыҡ хужалығының тауарҙар етештереү һәм халыҡты хеҙмәтләндереү тармаҡтары өсөн кадрҙар әҙерләйәсәк.

- Башҡортостанда юғары профессиональ белем биреү өлкәһендә үҙенсәлекле ваҡиға була - ике университет бер университетҡа берләшә, - тине Дәүләт Думаһы депутаты Александр Дегтярев. - Яңы вуздың исеме әлегә билдәләнмәгән, әммә ике вариант бар - "Башҡортостандың яңы юғары мәктәбе" һәм "Яңы Өфө юғары мәктәбе". Был ике университет социаль-гуманитар, иҡтисад һәм педагогия профилендә белгестәр әҙерләү йүнәлештәрен берләштерә.

Ғилми Советтар ултырыштарында Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығына Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты менән Башҡорт дәүләт педагогия университетын ҡушыу нигеҙендә яңы юғары уҡыу йорто ойоштороу тәҡдиме менән мөрәжәғәт итеү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республика социаль-психологик ярҙам үҙәге директоры А. Нурмөхәмәтова әйтеүенсә, каникул көндәрендә балалар бүләктәр генә түгел, ата-әсәнең иғтибарын да көтә. Балаға ниндәйҙер психологик ярҙам кәрәккәндә, 8 800 2000 122 ышаныс телефонына шылтыратырға була, тип хәбәр итә ул. Белгес-психологтар тәүлек әйләнәһенә, түләүһеҙ һәм аноним ярҙам күрһәтә.

✓Өфөнөң "Иммунопрепарат" предприятиеһын (Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының "Микроген" медицина иммунобиология препараттары буйынса ғилми-етештереү берекмәһе" федераль дәүләт унитар предприятиеһы филиалы) медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре Наил Заһиҙуллин етәкләне. Яңы вазифаға тәғәйенләнгәнгә тиклем Наил Заһиҙуллин филиал директорының производство, технологиялар һәм фән буйынса урынбаҫары булып эшләне.

✓16 апрелдә Мәскәү композиторҙар йортонон Ҙур концерт залында Салауат Низаметдинов иҫтәлегенә Башҡорт йырҙары студент фестивале үткәреләсәк. Был турала Башҡортостандың Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡыусы студенттар һәм аспиранттар ассоциацияһы етәксеһе Азат Бәҙрәнов хәбәр итте. Сара башҡортса йырларға яратыусылар араһында өс номинация буйынса уҙасаҡ: "халыҡ йыры", "халыҡ йырына әйләнгән эстрада йыры" һәм "автор йыры". Фестивалдең ойоштороу комитеты составына Башҡортостандың Мәскәүҙәге Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Мираҫ" хәйриә фонды һәм БР Композиторҙар союзы инәсәк.

✓З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зарипов тураһында китап баҫылып сыҡты. Уның авторы - яҙыусы Барый Ноғоманов. Китап Сочиҙа Олимпия уйындары асылыуға арналған. Был олимпиадала Ирек Зарипов та ҡатнашасаҡ. Уның әйтеүенсә, ул Сочиҙа үҙенең спорт карьераһын тамамлаясаҡ.

✓"Китап" нәшриәтендә мәктәпкәсә һәм кесе мәктәп йәшендәге балалар өсөн "Минең машиналарым" тигән ғәҙәттән тыш китап сыҡты. Баҫманың үҙенсәлеге шунда: ул формаһы менән автомобилгә оҡшаған, ә балалар унда рус һәм башҡорт телдәрендә машиналарҙың маркаһы һәм тәғәйенләнеше тураһында ҡыҫҡа шиғырҙар уҡый ала. Һүрәттәргә бай баҫманың авторы - Башҡорт дәүләт университеты аспиранты Азамат Мәһәҙиев.

АФАРИН!

**Яңы йылды баш ҡаланың башҡорт мәктәптәре яҡшы һөҙөмтәләр, еңеүҙәр менән ҡаршы алды. 2012-2013 уҡыу йылын тамамлаусылар араһында юғары уҡыу йорттарына инеүселәр ҙә, республика, ил, хатта донъя кимәлендә олимпиадаларҙа, конкурс-фестивалдәрҙә, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа еңеүселәр һәм призерҙар бихисап булды. Улар Яңы йылға яуланған уңыштарҙы ишәйтеү ышанысы менән аяҡ баҫты. Әйҙәгеҙ, уларҙың былтырғы ҡайһы бер мөһим ҡаҙаныштарын, иҫтәлекле ваҡиғаларын хәтергә төшөрөп китәйек.**

# БАЛАЛАРҘЫҢ ЕҢЕҮҘӘРЕН...

## яңы йылға алып сығабыҙ

• 2013 йылда **Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы** өсөн иң иҫтәлекле ваҡиға, әлбиттә, мәктәпте асыуға ҙур өлөш индергән, Башҡортостан мәғарифында билдәле эҙ ҡалдырған педагог Фатима Мостафинаның тыуыуына 100 йыллыҡты билдәләү булды. Ошо уңайҙан гимназияла синыф сәғәттәре, иншалар, яттан шиғыр һөйләү конкурстары, хәтер кисәһе үтте. Ә декабрь аҙағында педагогтың эшмәкәрлегенә арналған ҙур ғилми-ғәмәли конференция ойошторолдо. Сарала баш ҡаланың 42 белем биреү учреждениеһы уҡыусылары үҙҙәренең фәнни докладтары менән ҡатнашты.

2013 йылда гимназияның "XX централ" КВН командаһы Стәрлетамаҡта үткән Башҡорт асыҡ КВН-ы юниор-лигаһының төбәк һайлап алыу турын үтеп, финалға сыҡты. Финал ярыштары быйыл йыл башында буласаҡ. Бынан тыш "Һаумы, һаумы, әкиәт" конкурсының ҡала этабында "егерменсе"ләр ике Гран-при яуланы. Ә Азамат Зәйнитдинов "Соцветие дружбы" республика фестивалендә еңеүсе булды. Шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльмира Салауат ҡыҙы Хәсәнова ғаиләһе менән (ике балаһы ла ошо гимназияла уҡый) ҡалала үткәрелгән иң яҡшы ғаиләләр конкурсында - икенсе, ә шәжәрә конкурсында беренсе урын яуланы һәм быны ла мәктәп яулаған уңыштар исемлегенә индерергә була.

• **Республика башҡорт лицей-интернаты** былтырғы йылдан тулыһынса электрон журналдарға күсте һәм шуның менән Башҡортостандың күп районларында һәм күрше өлкәләрҙә йәшәгән ата-әсәләргә йөҙәр саҡырым алыҫлыҡта белем алған балаларының өлгәшен көн һайын күҙәтеп барыу мөмкинлеге булдырылды.

РБЛИ-ла робот техникаһы түңәрәге йылдам үҫеш алды. Былтыр лицей уҡыусылары Рәсәй кимәлендә уңышлы ғына сығыш яһаны. Шулай уҡ "Электрон мәктәп" мәғариф форумы сиктәрендә РБЛИ 20 смарт-мәктәп исемлегенә инде. Әлеге ваҡытта республикала беренселәрҙән булып махсус СМАРТ синыфы йыһазландырылды. Унда дистанцион белем биреү-белем алыу өсөн бар ҡорамалдар, мөмкинлектәр ҡаралған. "Орбита" полиолимпиадаһының географияһы киңәйеүен дә уҡыу йортоноң бер уңышы тип әйтергә була. Олимпиадала 2012 йылда 1200 бала ҡатнашһа, 2013 йылда иһә еңеүселәр 1950 кеше араһынан һайланып алынды. Ә лицейҙың "Башҡорттар.РУ" КВН командаһы биш йылдан һуң "Шаяниум"дың Гран-приһын йәнә үҙҙәренә ҡайтарҙы. Шулай уҡ ошо көндәрҙә генә улар Сибайҙа үткән Башҡорт асыҡ КВН-ы юниор-лигаһының төбәк һайлап алыу турында беренсе урын яуланы.

Һәм тағы. БР Мәғариф министрлығы һәм республика етәкселеге 2015 йылдан лицей бинаһы хаҡындағы мәсьәләгә ҡабаттан ҡайтасаҡбыҙ, тип, лицейға яңы бина тураһындағы вәғәҙәһен яңыртты.

• **Республика башҡорт иҡтисад лицей-интернаты** йылды күләмле иҡтисади форум менән тамамланы. Башҡортостандың урта белем биреү усаҡтарынан килгән уҡыусылар республиканы иҡтисади үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе. Ҡатнашыусылар, йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, бик етди, төплө сығыштар әҙерләгәйне. Форум сиктәрендә ойошторолған "Ауылдың үҫеш перспективалары" тип аталған түңәрәк өҫтәлдә, мәҫәлән, һәр уҡыусы үҙенең ауылын һаҡлап ҡалыу, үҫтереү буйынса проект тәҡдим итте. Балаларҙың ауылдары тормошона битараф булмауы, уның өсөн көйөүе һәм хәлде яҡшыртырға ихлас тырышыуы юғары уҡыу йорттарында, мәғариф өлкәһендә эшләгән жюри ағзаларын хайран ҡалдырҙы.

Шулай уҡ 2013 йылда лицей уҡыусыларынан торған төркөм Бурятияны таң ҡалдырып ҡайтты. Уларҙың сығыштары III Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәрҙең фестиваленә килгән башҡа ҡатнашыусыларға ла хуш килде. 14 кешенән торған башҡорт делегацияһы һәр ярыш майҙансығында уңышлы сығыш яһап, дипломдар, почет грамоталары менән бүләкләнде. Ә лицейҙың "Альтаир" лабораторияһы ағзалары Рәсәй һәм яҡын сит ил дәүләттәре араһында үткәрелгән "КИО-2013" халыҡ-ара конкурсында меңәрләгән уҡыусылар араһында иң яҡшылар иҫәбенә инделәр, Данат Ибраһимов иһә беренселекте бер кемгә лә бирмәне.

• **Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интенаты** беренсе булып ҡалыуын дауам итә. 2013 йылда гимназияны тамамлаған 179 уҡыусы Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы биреп, берҙәм генә юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде. Оҙаҡ йылдар буйы тотороҡло эшләп килгән кадрҙар һандалы уҡыу менән генә алдырмай, спорт яғынан да башҡаларға өлгө булырлыҡ. Мәҫәлән, БРГИ-ның еңел атлетика буйынса йыйылма командаһы йыл һайын Еңеү көнөндә үткәрелгән Өфө ҡала округы хакимиәте һәм "Молодежная газета" призДарына эстафетала 41-се (!) йыл рәттән беренсе урын яуланы. Ярышта ҡаланың бөтә урта белем биреү мәктәптәре ҡатнашыуын иҫәпкә алғанда, был һоҡландырғыс күрһәткес.

Гимназия исеменә тап төшөрмәйенсә, башҡорт рухиәтен пропагандалауға, үҫтереүгә ҙур иғтибар биргән ҡеүәтле белем усағы булып ҡала. Мәктәптә билдәле кешеләр менән осрашыуҙар даими ойошторола: ғалимдар, яҙыусылар, дин әһелдәре уҡыусыларға ҡунаҡҡа килә. Башҡа төбәктәр менән дуҫлыҡ яйға һалына (уҡыу йылы башында Пермь делегацияһы килде), гимназистар үҙҙәре республика районларына ҡунаҡҡа баралар (Иглин районының Аҡбирҙе ауылында концерт ҡуйҙылар) һәм Өфөләге мәҙәни сараларҙан ситтә ҡалмайҙар. Шулай уҡ, ЮНЕСКО планы буйынса фәнни-ғәмәли конференциялар үткәрәләр. Ғөмүмән, үҙҙәрен ғилми, физик, мәҙәни, рухи яҡтан үҫтерәләр.

**Мәктәптәрҙең уңыштарын Азамат ӘБҮТАЛИПОВ барланы.**



"Шаяниум"сылар.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һыуыҡ теймәһен...

Һалҡын ҡышта һыуыҡ теймәһен тиһәгеҙ, иң яҡшы профилактика ысулы итеп милли аш-һыуҙарыбыҙҙы ҡулланығыҙ. Һары май, һарымһаҡ, борос ҡушылған ҡайнар һыуҙа йәки һурпала иҙелгән ҡорот бик яҡшы дауа.

### Ангина

Һуғанды ит турағыстан үткәрергә, шул уҡ күләмдә бал ҡушып болғатырға һәм көнөнә 3-4 мәртәбә ашарҙан 15-20 минут алда бер балғалаҡ ашарға.

### Бауырҙы һаҡлағыҙ

200 мл зәйтүн майы, 3 баш һарымһаҡ, 1 кг бал һәм 4 лимон кәрәк. Һарымһаҡты әрсергә, лимондың орлоҡтарын алырға һәм 2 лимонды ҡабығынан әрсергә кәрәк. Һарымһаҡ менән лимонды ит турағыстан үткәрергә. Май, бал, һарымһаҡ, лимонды бер һауытҡа һалып, яҡшылап болғатырға, бер тәүлек һыуытҡыста тоторға. Шул ҡатнашманы көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 30 минут алда 1 ҡалаҡ ашарға. Был дауаны әлеге ҡатнашма бөткәнсе дауам итергә. Бауырҙы һаҡлау өсөн дауалау курсын йылына 3-4 тапҡыр эшләргә кәрәк. Ҡатнашма һыуытҡыста һаҡлана.

### Тын юлдары

Тын алыу юлдары сирҙәре менән күберәк бала-саға ауырый, сөнки улар тынды йышыраҡ ауыҙы менән ала. Тын юлдары ауырыуҙары башланыуының төп сәбәбе ошонда. Был осраҡта 1 стакан ҡайын еләге һутына 3 ҡалаҡ һөт ҡушып, көнөнә 1-әр стакан эсергә. Өлкәндәргә лә ошо уҡ кәңәш.

### Йүтәлдән дауа

Шар өрөү уйын ғына түгел ул. Оҙайлы йүтәлдән ҡотолоу өсөн уйынсыҡ шарҙарҙы өрөп тултырығыҙ. Шулай уҡ хроник ҡурылдай менән интегеүселәргә көн һайын диаметры 20 см-ҙан кәм булмаған шарҙы өрөп тултырыу хәл индерәсәк, тын алыуҙы еңеләштерәсәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Өҙлөк имләү

**Артыш ағасы.** Өҙлөктән артыш ағасын яндырып, төтәҫләп дауалағандар.

Өҙлөк япрағын ташлау. Өҙлөктө япраҡ менән имләйҙәр. Йылы мунсала парланып ултыралар. Шунда:

*Һурыҡ, һурыҡ, һурыҡ, һурыҡ имләйем,*
*Өҙлөк имләйем, - тип һамаҡлайҙар.*
*Өҙлөккәндә мунсала сабалар.*
*- Нимә сабаһын, әбей?*
*- Өҙлөк сабам, име-йомо шул булһын! -*

ти имсе. Ауырыуҙы сапҡан япраҡты өс юл сатына ырғыталар.

*Ғәлиәкбәр ҡыҙы Байрамбикә өҙлөккән,*
*Өс йөҙ алтмыш тамырҙары өҙлөккән,*
*Өс йөҙ ҡыр(ы)ҡ һөйәктәре айырылған.*
*Шуларҙы бергә йыям,*
*Шифа булһын, им булһын,*
*Иртәнге өҙлөктәрҙе сабам,*
*Көндөҙгө өҙлөктәрҙе сабам,*
*Киске өҙлөктәрҙе сабам,*
*Иҫке өҙлөктәрҙе сабам,*
*Яңы өҙлөктәрҙе сабам,*
*Ит өҙлөктәрен сабам,*
*Һеңер өҙлөктәрен сабам.*
*Айҙар ҙа ҡайтты - ҡайт,*
*Көндәр ҙә ҡайтты - ҡайт.*
*Минең ҡулдарым түгел,*
*Имсе-йомсо ҡулдары.*
*Имсе-йомсо,*
*Бер Хоҙайым ярҙамсы.*

**Ҡоро өҙлөк сабыу.** Ҡоро өҙлөкте мунсала түгел, ерҙә, үҙенең әйбере менән генә сабалар. Салауат доғаһы уҡыла.

**Өҙлөктө төнлөктән ҡыуыу.** Ҡайһы ер ауырта, шул ерҙән мунса йыуғысын уратып алып, уны япраҡҡа бәйләп, шул япраҡ менән сабып: "Ошо өҙлөк мунса йыуғысы кеүек өҙгөләнһен", - тип, бауҙы өҙөп, төнлөк аша бәрәләр.

**Төйөн име.** Өҙлөк булһа, епте төйнәп, төйөн итеп бәйләйҙәр ҙә ете юл сатына илтеп күмәләр. Өс юл саты ла етә, тиҙәр. Унда өс төрлө нәмә: ҡаҙаҡ, күмер, әҙерәк кенә һыу һалаһың.

Әсә өҙлөкһә, уның япрағы айырым була. Уны сабалар за япрағын төнлөк аша бәрәләр. Имләгәндә:

- Әбей, нимә булған, нимә имләйһең? - тип, бер кеше һорай.

- Быға өҙлөк булған, өҙлөк имләйем, - тип яуаплай әбей. Өҙлөккәндә ауырыуҙың күлдәк итәгенә тоҙ төйнәп ҡуйғандар.

### Ҡан ауырыуҙарына бәйле им-том

**Ҡан баҫымы юғары булһа, им-том.** Әгәр кешенең ҡан баҫымы юғары булһа, муйын менән баш араһын һыйпап, ошо һүҙҙәрҙе әйтәләр:

*Атай - баш,*
*Инәй - муйын,*
*Атай - ҡул,*
*Инәй - ҡуйын,*
*Уң яҡты баҫам,*
*Һул яҡты асам!*
*Ете һөйәккә - бер елем,*
*Бер елемгә - баш тамыр.*
*Бер һыйпайым,*
*Ике һыйпайым,*
*Тфү, тфү, тфү,*
*Име-томо шул булһын!*

**Яман ҡан име.** Талсығыуҙы, баш ауыртыуын, быуындар һыҙлауын йыш ҡына тәнгә күпләп "яман ҡан" йыйылыу менән аңлатҡандар. Бындай ауырыуҙарҙы "ҡан сығарыу" юлы менән дауаларға тырышҡандар. Бының өсөн бысаҡ осо менән ауырыуҙың ҡан тамырҙарына үтерлек итеп йырым яһағандар. Ҡайһы саҡта һөлөктәрҙе лә "ҡан ебәреүҙә" файҙаланғандар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ЭШ УРЫНЫНАН...

## хәбәр килмәй, тип борсолма

**Яңы йыл байрамындағы оҙайлы каникулдар - эш кешеһенә ял итеп алыу, сәләмәтлеген нығытыу өсөн иң ҡулайлы мәл. Әммә социологтар мәғлүмәттәре буйынса, эшләргә күнеккән кешеләрҙең күбеһе ял ваҡытында үҙен насар тоя, йоҡлай алмай, төрлө сирҙәренә зарлана. Улар гел эш тураһында уйлай, офистан хәбәрҙәр булмағанға күрә, депрессияға бирелә башлай. Артыҡ эшкә бирелгәнлек ҡайһы саҡта һеҙҙең файҙаға, ҡасан һеҙгә ҡаршы эшләй? Бындай кешеләргә нисек дөрөҫ ял итергә өйрәнергә? Был һорауҙарға психоаналитик, Башҡорт дәүләт университетының психология факультеты уҡытыусыһы Әлфиә Сәғит ҡыҙы БАЙРАМҒОЛОВА яуап бирә.**




Эшкә артыҡ бирелеү - ул химик һәм психологик бәйләнгәнлек кеүек үк, ысынбарлыҡтан ҡасыуҙан барлыҡҡа килә. Беҙҙең йәмғиәттә уны сир тип танымаһалар ҙа, сит илдәрҙә эшһөйәрҙәрҙең аноним ойошмалары күптән бар һәм унда ысынлап та эскеселәр һәм наркомандар менән эшләгәндәге кеүек психологик ысулдар ҡулланып дауалайҙар. Тимәк, артыҡ эшкә бирелгәнлек, гел эш тураһында ғына уйлау, бер минут та эшһеҙ тора алмау - ул психологик сир. Бындай кеше өйҙә лә тик эш тураһында ғына һөйләй, эш тураһында ғына уйлай, йәғни даими көсөргәнештә була. Ул, ғәҙәттә, көсө етмәҫлек маҡсаттарға ынтыла, уларҙы тормошҡа ашыра алмағанлыҡтан, тағы ла нығыраҡ ярһый. Эшендә килеп тыуған ябай ғына күңелһеҙлек тә уны көйөндөрә, ә эшен юғалтыу бындай кеше өсөн донъя бөтөү менән бәрәбәр.

Бындай бәйләнгәнлек барлыҡҡа килеүенең сәбәптәре төрлөсә. Беренсеһе - үҙенде раҫлау. Был осраҡта эш үҙендең баһаңды күтәреү һәм үҙ алдыңда үҫеү өсөн кәрәк. Эшһөйәр шул рәүешле үҙенең балалыҡ комплекстары һәм тормоштоң башҡа өлкәләрендәге уңышһыҙлыҡтарын ҡапларға маташа. Ҡайһы бер кешеләр өсөн эш тыныс пристань, тормош мәшәҡәттәренән ҡасыу урыны. Ғаиләһендә үҙен яратмаһалар, аңламаһалар һәм баһаламаһалар - ир кеше ял көнөндә лә эшкә сығып китеүҙе хуп күрә. Ҡайһылар ғәҙәти тормоштоң ауырлыҡтарынан ҡурҡа, ә эштә барыһы ла аныҡ, теүәл. Ғаиләләге өлкән һәм бер бөртөк булған балалар, ғаиләһендә ата-әсәһе эскән, бала саҡғы етешһеҙ үткән балалар шулай уҡ эшкә бирелеп китеүсән була. Өйөндә берәй ғаилә ағзаһы менән конфликтта булғандар ҙа бындай психологик бәйләнгәнлеккә дусар була. Ғәҙәттә, бындай кешенең ғаилә ағзалары өсөн уның эштә булыуы яҡшыраҡ та, сөнки ул өйҙә йышыраҡ насар кәйефтә була, проблемалар менән ҡыҙыҡһынмай. Ул хаҡлы ялға сыҡҡас, ныҡ ыҙалай, бер кемгә лә кәрәк түгелмен, тип уйлай. Һөҙөмтәлә, бер туҡтауһыҙ табиптарға йөрөй, өй-дауахана-дарыухана юлын тапау уның көндәлек "эш"енә әүерелә.

Эшенә бәйле кеше ябай хеҙмәткәрҙән нимәһе менән айырыла һуң? Ябай хеҙмәткәр ял ваҡытында - эш, эш ваҡытында ял тураһында уйламай. Ҡайтһа, өйөндә проблемаларҙы хәл итә, балаһын тәрбиәләүҙә әүҙем ҡатнаша. Ул ялға хоҡуғы барлығын белә, эш урынында ниндәйҙер үрләтеүҙәрҙе, йәки эш хаҡы күтәрелеүен көтә, юғарыраҡ эш хаҡы түләнгән икенсе эште эҙләргә һәләтле. Йәғни, уның өсөн барыһы ла айыҡ аҡыл менән үлсәнә, ул бер ваҡытта ла ғүмерен эшкә генә арнамай, ғаиләһе, балалары, ата-әсәһе уның өсөн ҙур ҡиммәт һанала. Ҡайһы берҙә артығыраҡ эшләргә тура килгәндә лә самаһын белә. Шулай ҙа эш һеҙҙең өсөн рухи үҫеш, ижади һәләттәрегеҙҙе үҫтереү, тормошҡа ашырыу урыны булырға тейеш. Элек кенә бер урында бер вазифала 40 йыл эшләп, хаҡлы ялға сығыу дәрәжә һанала ине. Хәҙерге заманда әллә күпме мөмкинлектәр, юлдар бар. Һәр хәлдә, сит илдәрҙә хеҙмәткәр бер урында биш йыл ултырып, артыҡ уңыштарға өлгәшә алмай икән, уны шунда уҡ эшенән бушаталар. Ғөмүмән, эшенә бәйлелек кисергән кешеләр йәмғиәт өсөн дә, ойошма һәм етәксе өсөн уңайлы. Бындай кешегә теләһә ниндәй эш ҡушырға, башҡалар эшләй алмаған эште лә уның иңенә күсереп һалып була, дөрөҫөн әйткәндә, ундайҙар, ғәмәлдә, бер үҙе 3-4 кешенең эшен башҡара. Ғаиләһе лә, эш урыны ла бар, күпмелер аҡса ла алып ҡайта, иң мөһиме, эшһеҙ йөрөмәй, тигән уйҙа була.

Шулай итеп, әгәр ҙә үҙегеҙҙә эшкә бәйлелек барлығын һиҙеп ҡалһағыҙ, мотлаҡ психолог ярҙамына мөрәжәғәт итергә кәрәк булыр. Сөнки һәр бәйлелектән ҡотолоу төпкө аңға тәьҫир итеүҙән башлана. Бала саҡтан һалынған дөрөҫ булмаған күҙаллауҙарҙы үҙгәртеү, беренсе урында үҙеңдең ихтыяждарың тороуын, "мин - буш урын", "мин - бер кем дә түгел" тигән ҡараштарҙы үҙгәртеү мотлаҡ. Ғөмүмән, кеше һәр ваҡыт башҡаларға оҡшарға тырышып, башҡалар мине күрһен, мине ятатһын, тип йәшәй. Был проблеманың нигеҙендә лә кешенең бала саҡта ата-әсәнән бер ниндәй шарттарһыҙ алырға тейеш булған һөйөүҙең булмауынан килә.

Яңы йылды һәр кем үҙгәреүҙәр, яңырыуҙар осоро тип ҡабул итергә күнеккән. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, байрам, ял мәлдәрен үҙебеҙҙе яратырға, баһаларға өйрәнеүгә бағышлайыҡ. Ҡыш миҙгеле әүҙем ял итеү осоро ла, эшегеҙҙе онотоп, рәхәтләнеп ял итегеҙ, саңғы шыуығыҙ, балаларығыҙға күберәк иғтибар бүлегеҙ. Кемгәлер кешеләрҙән, аралашыуҙарҙан ял итеп алырға кәрәк икән, тәбиғәттә йөрөгөҙ. Был ял көндәрен йышыраҡ ауылда үткәрергә күнеккәнбеҙ. Әлбиттә, был юлы ла туғандарығыҙ һеҙҙе өйҙән-өйгә йөрөтөп ҡунаҡ итергә тырышыр. Әммә һанаулы ғына көндәрҙе ҡунаҡҡа йөрөп үткәрергә кәңәш итмәҫ инем. Йоҡоғоҙҙо туйҙырығыҙ, үҙегеҙҙе аңларға тырышығыҙ, үҙегеҙ өсөн файҙалы нәмәләр эшләгеҙ. Эске күңелеңә иғтибар бирә башлаһаң, ул үҙе үк һеҙгә ярҙамға киләсәк. Төштәр күрә башлаясаҡһығыҙ, ә уларҙа ғәҙәттә бар һорауҙарға яуап алып була, нимәләр өҫтөндә эшләргә кәрәклеген иҫкәртеүсе сигналдарҙы тойоп өйрәнергә генә кәрәк. Шул саҡта инде офистан хәбәрҙәр булмауы һеҙҙе кире тойғоларға көйләй алмаҫ, эшкә лә яҡшы ял итеп, яңы көстәр менән барасаҡһығыҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Икһеҙ-сикһеҙ дала, күҙ күреме етмәҫлек офоҡтарға тиклем һуҙылған киңлек, һыубаҫар, мул туғайлы урмандар - Һамар башҡорттарының ере тап шулай күҙ алдына баҫа. Оло тарих һаҡлай был ерҙәр. Һамар башҡорттары йәшәгән төбәк хаҡында боронғо яҙмаларҙа "башҡорт иленең сиге" тип әйтелә. Рәшит Ниғмәти, Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндар, Ғәббәс Дәүләтшин, Фатима Мостафина, Хәсән Бәшәр, Харис Йомағолов исемле билдәле милләттәштәребеҙ тыуған төбәк ул. Бөгөнгө көндә был ерҙәр административ Башҡортостандан ике сик менән айырылған. Һуңғы иҫәп алыуҙар буйынса Һамар өлкәһендә 7,3 мең, күрше Һарытау өлкәһендә 3,5 мең башҡорт йәшәй. Оло Иҙел - Волга буйында борондан йәшәп килгән милләттәштәребеҙҙең тарихы менән тарих фәндәре кандидаты Марсель Мөрит улы МАНАПОВ таныштыра.**

# ОЛО ИҘЕЛ ДАЛАЛАРЫ БАШҠОРТТАРЫ



### Әхмәт ибн Фаҙлан уларҙы ла күргән

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, VII быуат аҙағында башҡорттарҙың ҡышлауыҡтары Түбәнге Волганың көнсығыш яры буйлап үтә. Улар хазарҙар менән йәнәш йәшәй һәм даими рәүештә булғарҙарға ҡурҡыныс менән янап торалар. Ғәрәп хәлифәтенең илселеге сәркәтибе Әхмәт ибн Фаҙлан 921-922 йылдарҙағы Багдадтан Волга Булғарияһына сәйәхәте ваҡытында, башҡорттарҙы, уларҙың йәшәгән ерҙәрен күрһәтеп, телгә ала. Тикшеренеүҙәрҙән һуң, ибн Фаҙлан һүрәтләгән башҡорт ерҙәре Сağан йылғаһынан Ҡондурса йылғаһына ҡарай үтә, Волга буйы далаларына тура килә (хәҙерге Һамар, Һарытау өлкәләре).

Монгол империяһының барлыҡҡа килеүе күп халыҡтарҙың яҙмышына ҙур йоғонто яһай. Халыҡтар күп быуаттар йәшәгән ерҙәрен ҡалдырып китергә мәжбүр була. Монголдарҙың баҫымы көсәйеүе сәбәпле, Волга буйында йәшәгән бөрйәндәрҙең бер өлөшө лә Көньяҡ Урал буйҙарына күсенә, икенсе өлөшө иһә, үҫәргәндәр, түңгәүерҙәр менән бергә Һаҡмар буйҙарында төйәкләнә. Бары табындар ғына Ырғыҙ буйҙарында, Волга йылғаһының түбәнге ағымында, Төньяҡ Арал далаларында күпмелер ваҡыт ҡала, ләкин һуңынан XIII-XIV быуаттарҙа уларҙың да бер өлөшө көслө баҫым аҫтында Ыҡ, Сәрмәсән, Туҡ, Бәләкәй Уран, Ҙур Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйҙарына китергә мәжбүр була. Волга, Дон йылғалары ярында, Каспий алдында, Кавказ янында күсенеп йөрөгән ҡатайҙар Кәмәлек йылғаһы бассейнында нигеҙләнә.

XV-XVI быуаттың беренсе яртыһында башҡорттарҙың Волганың һул ярында ғына түгел, яҡындағы башҡа йылға бассейндарында ла йәшәүе хаҡында телгә алынмай. Был Алтын Урҙа тарҡалып, Ноғай дәүләте көсәйә башлағандан һуң, башҡорт ырыуҙарының төньяҡ-көнсығышҡа, Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы райондарына күсенеүе менән аңлатыла.

XVI быуаттың икенсе яртыһында, XVII быуаттың башында башҡорт ырыуҙары Волга далаларында Оло һәм Бәләкәй Үҙән, Яйыҡтың түбәнге ағымында йәшәй, күсенеп йөрөй. Шул уҡ ваҡытта эргәлә йәшәгән ҡалмыҡтар менән бәхәстәр ҙә сығып тора. Аҙ һанлы булыу сәбәпле, башҡорттарҙың бер өлөшө күсенеп китә. Ҡалғандары иһә, ҡалмыҡтар менән союз төҙөп, даими рәүештә Терс һәм Малыков атамалы монастырҙар биләмәләрендә йәшәгән крәҫтиәндәргә ҡурҡыныс менән янай. Ошо арҡала рустар Ырғыҙ буйындағы ерҙәрҙе ыҙанлай алмай, сөнки "башкиры и калмыки и воровскими кочевьями и зимуют и за зверьми ходят, от того они на луговой стороне пашни не пашут и сен не косят" [11].

1661 йылда ҡалмыҡтар рус подданлығы аҫтына ингәс, хөкүмәт башҡорттарҙың ҡалмыҡ ерҙәренә сапҡындары менән көрәшә башлай. Әммә башҡорттар үҙҙәренең жалованный грамотаһында яҙылған хоҡуҡтарҙы алға һөрә. Грамотаның тексынан күренеүенсә, Волга далаларында йәшәгән башҡорт ырыуҙарының ерҙәре "от Сарымсака, три Узени, до горы в степной стороне, три реки Узени и Камелик, от истоков до устьев со всеми горами; верхняя граница - до глубокого Дурткуль", бөрйәндәрҙең ере һанала. Шулай ҙа ҡалмыҡтарҙың Рәсәйгә ҡушылыуы менән башҡорттарҙың ерҙәре тағы ла тарая.

1771 йылда ҡалмыҡтарҙың күп өлөшө Ҡытайға күсенеүе сәбәпле башҡорттар үҙҙәренең ерҙәренә ҡабаттан ҡайта башлай. Оло һәм Бәләкәй Үҙән, Оло һәм Бәләкәй Сәҙе, Һал далалары (Һал йылғаһы бассейны) һәм Саҡрыл күле (бөгөнгө көндә Большое Соленое тип атала) буйҙарында төбәкләнеп, Байыс, Күстән, Күҫәкбай, Хәсән, Йомағужа, Йәнбирҙе ауылдарына нигеҙ һалалар.

Башҡорттарҙың артабан үҙ ерҙәрен юғалтыуы Бәләкәй Йөҙ ҡаҙаҡтарының рус дәүләтенә ҡушылыуы һәм уларға, шулай уҡ яңы төҙөлгән Урал казак полкына башҡорт ерҙәрен бүлеп биреү менән бәйле була. Казактар менән килеп сыҡҡан бәхәстәр башҡорттар мәнфәғәтендә хәл ителмәй. 1866-1867 йылдарҙа Һарытау губернаһының Яңы Үҙән өйәҙендә булған башҡорт тораҡ пункттары таратыла. Волга аръяғы башҡорттары, бөтә башҡорттар кеүек үк, казак сословиеһынан крәҫтиән сословиеһына күсерелә. 1866 йылда губерна властары һәм Урал казак ғәскәре уларға күсенер өсөн аҡса бирә. Шулай итеп, Үҙән буйҙарынан башҡорттарҙы Бәләкәй Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйҙарына, Ырымбур губернаһына күсереү башлана.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘ, ИМАНЛЫ БУЛАЙЫҠ!*

# ДОНЪЯ МАЛЫНА АЛДАНМАЙЫҠ...

**Йәмғиәтебеҙ, ҡараштарыбыҙ, йәшәйешебеҙ тулыһынса фанилыҡҡа батып бара, яйлап ҡына, көндән-көн, ҡолдарға әйләнеп барабыҙ түгелме? Шулай тимәй булмай - аҡса, мал тип үҙебеҙҙең кеше икәнлегебеҙҙе онотабыҙ, туған-тыумасаларыбыҙҙы, күрше-күләндәребеҙҙе, таныш-тоноштарыбыҙҙы рәнйетәбеҙ, алдарға, бурыстарҙы ҡайтармаҫҡа ла өйрәнеп алдыҡ.**

Ә балаларыбыҙ хаҡы? Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да был тиклем етемдәр булмаған! Бөгөн дәүләтебеҙ халыҡ һаны кәмей, демографик афәт яҡынлаша, тип яр һалғанда, үҫмер генә ҡыҙҙарыбыҙ аборттар яһата. Был бит үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа әсәй булмаған кешенең һаулығы өсөн оло фажиғә. Өҫтәүенә, ундайҙарҙың тағы ла ауырға ҡала алыуы икеле... Ярай, аңһыҙ бала белекһеҙлеге сәбәпле был аҙымға бара ти, ә бит аҡ халатлы табип барыһын да яҡшы белә! Ниңә ул ошо енәйәттән баш тартмай? Күрәһең, аҡса төҫө күҙҙәребеҙҙең нурын алып, тәңкә зыңы ҡолаҡтарыбыҙҙы тондороп, донъя малы зиһенебеҙҙе баҫып алғандыр...

Халҡыбыҙҙың быуаттар буйы һаҡлап килгән рухи ҡиммәттәре аҫты-өҫкә түңкәрелгәндә, әҙәм балаһы үҙенең хайуандарҙан нимә менән айырылғанын онотҡанда, бары, иманлы булайыҡ, тип өндәргә ҡалалыр. Сөнки, төптән уйлап ҡараһаң, Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген, Унын ғаләмдәге бөтә нәмә хаҡында ла белеүе һәм һәр ваҡыт беҙҙең ғәмәлдәребеҙҙе күҙәтеп барыуы хаҡында төшөнгәндәр, Раббыбыҙҙың беҙҙән Кеше булып ҡалыуыбыҙҙы һәм башҡаларға ҡарата ғәҙел мөғәмәлебеҙҙе талап итеүен аңлағандар йәмғиәтендә бөгөнгө заман ауырыуҙары урын тапмай. Хакимдар - ғәҙеллек, табиптар - һаулыҡ, ғалимдар белем һағында тора. Иманлы булайыҡ, дуҫтар! Киләсәгебеҙ һәм балаларыбыҙ хаҡына рухи яңырыу, рухи байығыу юлын һайлайыҡ.

**Сафа ИЛЬЯСОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Йорт производствоһы

Үҙҙәренең XX быуат башына һаҡланып ҡалған урмандарында бүрәнә әҙерләү һәм һал ағыҙыу менән нигеҙҙә Ағиҙел һәм Инйәр йылғалары башында йәшәүсе башҡорттар шөғөлләнгән. Бүрәнә ҡышын әҙерләнә, ул ҡырҡылып ҡына ҡалмай, ә йылға ярына уҡ килтерелә. Һалдарҙы ҙур йылғаларҙан ташҡын ваҡытында ағыҙғас, уларҙы бәләкәй, тар һәм оҙон, еңел хәрәкәтләнерлек итеп эшләйҙәр. Йылға тауҙан сыҡҡанға тиклем һал ағыҙыу, ара оҙонлоғона ҡарап, ике-биш көн дауам иткән. Һалдарҙы иртәнге сәғәт дүрттән киске сәғәт туғыҙға тиклем ағыҙғандар. Төнгөлөккә инде ярға туҡтала. Үҙҙәренең урманы булмаған башҡорттар бай башҡорттарға һәм рус урман сәнәғәтселәренә һал ағыҙыуға ялланып эшләгән.

Дегет һәм ыҫмала ҡайнатыу урман эсендә, тау битләүендә йәки берәй соҡор ярында эшләнгән махсус ер мейестәрҙә, баҙҙарҙа башҡарыла. Ерҙә груша йәки лимон формаһында эшләнгән соҡор эске яҡтан ҡалын итеп балсыҡ менән һылана йәки кирбес менән ҡатлана. Соҡор өҫтөнә ике бүрәнәнән 3х3 дәүмәлендә бура ултыртыла. Соҡорҙоң өҫкө ауыҙының диаметры 70 сантиметр була. Тәрәнлеге - 2 метр самаһы, киңлеге - 1,5 - 1,7 метр. Соҡор төбөнән тышҡа ағас торба сыға, дегет йәки ыҫмала тап уның буйынса аға. Торба сыҡҡан урында тыштан стена кирбес йәки бүрәнә менән бурала, ә торба үҙе тәҙрә менән ябыла. Ҡайһы берҙә соҡор ауыҙы алдына ағас япма эшләнә. Ыҫмала әҙерләү өсөн нигеҙҙә сайырлы ағастар, түмәрҙәр һәм тамырҙар, дегет өсөн туҙ яндырыла. Соҡор төбөнә радиус буйынса ҡарағай төпһәләре һәм ботаҡтар һалына, соҡор тулғас, өҫтән ут төртөлә. Ут талғын ғына янған, ағастар янып бөткәс, күмер һүндерелгән, йәғни соҡор өҫтө томаланған. Икенсе көн, күмер һүнгәс, уларҙы таҙартып сығаралар, ә ыҫмала торба буйлап аға. Ҡайһы берҙә ыҫмала асыҡ соҡорҙарҙа ла ағыҙыла. Был осраҡта инде сайырлы сеймал ҙур булмаған конус формаһында өйөлә. Уның өҫтөнә ҙур ҡарағай ҡаҙыҡтар һалына, уның өҫтөнә - һалам йәки тиҙәк, уның өҫтөнә, бер өлөшөн асыҡ ҡалдырып, кәҫ өйөлә. Яндырылған һалам конусты ҡаплап ала. Кәҫ менән ҡаплау һөҙөмтәһендә ут яй ғына яна, көйрәп ятыусы сыраҡ ыҫмала бүлеп сығара һәм ул мейес ауыҙына аға, һуңынан торба аша махсус һауытҡа йыйыла. Туҙҙан дегет ҡайнатыу шул уҡ ысул менән башҡарыла. Ҡайһы берҙә башҡорттар соҡорҙоң яртыһын сайырлы ағас, яртыһын туҙ менән тултыралар. Был осраҡта дегет менән сайыр ҡатнашмаһын алалар һәм ул тәгәрмәс майлау өсөн файҙаланыла.

Башҡорт кәсепселегенә күҙәтеү яһау башҡорттарҙа минераль матдәләрҙе эшкәртеү киң таралмағанлығын күрһәтә. Башҡорттарҙа керамика булмаған; тимер эшкәртеү аҙ күләмдә башҡарылған һәм киң таралмаған. Бары тик хайуан һәм йәшелсә матдәләрен эшкәртеү генә башҡорттарҙа ҙур үҫеш ала һәм улар өсөн мөһим иҡтисади әһәмиәткә эйә була.

*✓ Беҙ үҙебеҙҙең Төп законыбыҙға ҡаршы килгән стандартты тыныс ҡына ҡабул иттек. Берҙәм дәүләт имтиханы ла беҙҙең конституцион хоҡуғыбыҙҙы инҡар итә, йәғни уның буйынса беҙ туған телебеҙҙә БДИ бирә алмайбыҙ.*

# БАЛАНҒА ӘҮРӘГӘН

**Йылдағыса, иҫке йылды оҙатып, яңы йылды ҡаршылап, гәзитебеҙҙең тәүге һанын сығарғанда уҡыусыларыбыҙ иғтибарына әүҙем авторҙарыбыҙҙың "Ситтән тороп диалог"ын тәҡдим итәбеҙ. Улар: Хәйбулла районынан - крайҙы өйрәнеүсе тарихсы Рәшит НАСЫРОВ, Белорет ҡалаһынан - яҙыусы, журналист Мансур ҺИҘИӘТОВ, Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан элекке мәғариф хеҙмәткәре, журналист Мөнир ШӘЙХЕТДИНОВ һәм Мәләүез ҡалаһының "Көнгәк" гәзите хеҙмәткәре Лена АБДРАХМАНОВА.**

**▶ Үткән 2013 йыл ниндәй ваҡиғалары менән һеҙҙең хәтерҙә тороп ҡалыр тип уйлайһығыҙ? Ғөмүмән, йылдың иң сағыу, иң күңелле йә иң күңелһеҙ ваҡиғаһы ниндәй булды? 2013 йыл башҡа йылдарҙан ни яғы менән айырылып торҙо?**

**Рәшит НАСЫРОВ:** "Тыуған ауылым Аҡъюл" тигән китабымды тамамланым. Иң ҙур шатлығым шул. Ғөмүмән, 2013 йыл башҡа йылдарҙан бик ҡатмарлы булыуы менән айырылып торҙо. Ҡатмарлы шуның өсөн, беҙ һуңғы егерме йыл эсендә өлгәшкән күп кенә уңыштарыбыҙҙы юғалтабыҙ. Мәҫәлән, яңы мәғариф стандартын мин РФ һәм БР Конституцияларына ҡаршы эшләнгән яңылыҡ тип баһалайым. Был документ Конституциялағы һәр баланың үҙ телендә белем алырға, үҙ телен өйрәнергә хоҡуҡлы тигән фекерен инҡар итә. Беҙ үҙебеҙҙең Төп законыбыҙға ҡаршы килгән стандартты тыныс ҡына ҡабул иттек, бына шуныһы аптырата. Берҙәм дәүләт имтиханы ла беҙҙең конституцион хоҡуғыбыҙҙы инҡар итә, йәғни уның буйынса беҙ туған телебеҙҙә БДИ бирә алмайбыҙ.

Ауыл халҡы йылдан-йыл ярлылана бара. Фермерҙарға дәүләт ярҙамы күрһәтеү хаҡында күп һөйләнеләр, әммә был ярҙамды ла банктар үҙ файҙаһына борорға әҙер тороуын аңланыҡ хәҙер. Һәр саҡтағыса, уҙған йылдың шатлыҡтары аҙыраҡ булды.

**Мансур ҺИҘИӘТОВ:** Мине быйыл Учалы яҙыусылар ойошмаһына ағза итеп алдылар. Шуға тиклем мин кәңәшсеһеҙ ҙә, тәнҡитсеһеҙ ҙә үҙ ҡаҙанымда ғына ҡайнап мәшәҡәтләндем. Икенсенән, Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 180 йыл тулыу айҡанлы ойошторолған байрамдар ваҡытында Учалы яҙыусылар ойошмаһы ағзалары менән бергә ишан тыуған өйҙөң нигеҙен барып күреү, уның эҙҙәренең йылыһын һаҡлаған тупраҡҡа аяҡ баҫыу насип булды.

Ялтлап торған, күҙ сағылдырырлыҡ ваҡиғалар Рәсәй кимәлендә лә, үҙебеҙҙә лә булманы шикелле уҙған йылда. Уның ҡарауы, күңелһеҙҙәре етерлек. Шул иҫәптән, Волгоградта пассажир автобусын шартлатыу. Үҙендекен генә түгел, бер ғәйепһеҙ башҡаларҙың да ғүмерен ҡыйыуҙы ниндәй маҡсатҡа ышыҡланып башҡарһаң да, мәғәнәһеҙлек булыуҙан бигерәк, уның бер тамсы ла аҡ тап йоҡмаҫлыҡ енәйәт икәнен аңлау өсөн тағы нимә кәрәктер? Ҡаҙанда самолет ҡолап, тиҫтәләрсә кешенең һәләк булыуы ла күңелле хәл түгел. Тегендә шартлай, бында ҡолай. Авиаһәләкәттәрҙә зыян күреүселәргә аҡсалата компенсация түләй ҙә ҡотолалар рәхәт кенә. Әйтерһең дә, шуның менән уларҙың балаларын, туғандарын, ата-әсәләрен терелтеп була.

Иң беренсе, юғарылағыларҙа булырға тейешле әхлаҡтың баһаһы төштө, минеңсә. Французлар бер енесле никахты рәсмиләштереп тә өлгөрмәне, беҙҙекеләр "суррогат әсәләрҙән суррогат бала" таптырып ала башланы. Элегерәк мин колхоз һыйырҙарын ғына яһалма аталандыраларҙыр, тип уйлай инем... Наҙан булғанмын икән!

**Мөнир ШӘЙХЕТДИНОВ:** Минең өсөн уҙған йыл ҡыуаныстарының береһе - Башҡорт дәүләт университетенең филология факультетын 1972 йылда тамамлап, илебеҙҙең төрлө төбәктәренә таралған бер туғандарҙай курсташтарымдың ҡырҡ бер йылдан һуң Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында осрашыуы булғандыр. Әлфиә Күзеева Екатеринбургтан, Таңһылыу Йәғәфәрова Мәләүездән, Фирҙәүес Нафикова Учалынан, Әлфирә Гәрәева Миәкә районынан, Хәмиҙә Минһажетдинова, Фәниә Шәһиева, Тәнзилә Ишкина, Гөлфирә Ҡотлахмәтова,Зәкинә Байназарова,Сафия Юлмөхәмәтова Өфө ҡалаһынан килделәр.

Осрашыуҙың икенсе көнөндә курсташыбыҙ Әлфирә Гәрәева ҡунаҡтарҙы Миәкә районына алып китте һәм Нарыҫтау тауында ерләнгән сәхәбәләрҙең мемориаль комплексы менән таныштырҙы.

Минең өсөн үткән йылдың башҡа йылдарҙан әллә ни һиҙелерлек айырмаһы булманы тип әйтерлек - шул уҡ сәйәси уйындар, яңы шарттарға яраҡлаша алмай яфаланыусы ауыл халҡының күпселек өлөшөнөң бөлгөнлөккә төшөүе, мәғариф өлкәһендәге артҡа сигенеүҙәр элеккесә дауам итте.

**Лена АБДРАХМАНОВА:** 2013 йыл минең хәтерҙә тик йылы, сағыу хәтирәләре менән генә ҡалыр, тип уйлайым. Йыл тыныс, матур башланып киткәйне, йыл буйы шулай күңелле һиллек тойғолары ғына биләне. Тормошома ҡағылған ваҡиғалар бер-береһен тулыландырып, бер-береһенә тура килеп, аһәңдәш булды. Минең өсөн яҙ ҙа, йәй ҙә, көҙ ҙә, ҡыш та үҙ ваҡытында, үҙ биҙәге, төҫө, матурлығы менән килде. Үҙ мәлендә ҡары ла яуҙы, ямғыры ла булды. Йылдың иң сағыу, иң күңелле ваҡиғаларынан яҡын кешеләремдең юбилейҙарын атар инем. Быйыл, ысын мәғәнәһендә, йыл юбилейҙарға бай булды: майҙа әсәйемә - 70, июндә бейемемә 85 йәш тулды. Башҡа туғандарым, яҡын кешеләрем 20, 30, 35 йәштәрен билдәләне. Мәктәпте тамамлағанға 25 йыл тулды.

Йыл башҡа йылдарҙан әллә ни айырылып тормаһа ла, күңел түренән урын алған иҫтәлекле ваҡиғалары күп булды: тыуған йортомдоң нигеҙен яңыртып, ҡустым уның урынына ҙур, мөһабәт йорт һалып ултыртты. Был күренеш тә, һис шикһеҙ, минең өсөн бик мөһим һәм шатлыҡлы. Берҙән-бер ҡыҙым Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалын тамамлап, Өфөлә эш башланы.

**▶ "Көн яманы китеп барыр, китмәҫ әҙәм яманы" тигән мәҡәл-әйтемде нисек аңлайһығыҙ? Был әйтемде 2013 йылғы һауа торошона бәйләп аңлатып буламы?**

**Рәшит НАСЫРОВ:** Яманлыҡ, яуызлыҡ тәбиғәттә юҡ, ә иң аҡыллы тип һаналған кешеләрҙә генә бар. Яманлыҡ элек тә булды, хәҙер ҙә бар һәм киләсәктә лә буласаҡ. Әҙәмдәге яманлыҡ көн яманы үтеп киткән һымаҡ, үтеп китһә, ҡана ла һуң. 2013 йылда республикабыҙға, халҡыбыҙға ҡаршы йәшерен эш алып барыусылар үҙ йөҙҙәрен тағы ла асығыраҡ итеп күрһәтте шикелле. Был хәлде беҙ үткән йылдың һауа торошонда ла тойҙоҡ. Ҡышын ҡар, йәйен ямғыр күп яуҙы, ҡыҫҡаһы, тәбиғәт ҡырыҫыраҡ, киҫкенерәк булған һайын, кешеләрҙең дә ысын йөҙө яҡшыраҡ күренә, асыла барған һымаҡ булды.

**Мансур ҺИҘИӘТОВ:** Бер әйтем дә буш урында тыумай. Улар фәһем өсөн тормош күренештәрен сағыштырыуҙан барлыҡҡа килә лер, тип уйлайым. Тормошто дөрөҫ аңлап, бер үк тырма башына ике тапҡыр баҫмаҫ өсөн. Әйтәйек, йыш ҡына утлы ҡылысы менән һелтәнеп, бәлә-ҡаза килтереүсе дауыл, болот таралып ҡояш күренеү менән әле генә ҡото алынған кешенең йөҙөндә йылмайыу тыуҙыра. Был аңлашыла ла. Сөнки тәбиғәт эскерле була алмай. Уның бар ҡылмышы - ихласлыҡ. Ә бына

## ЯҠТЫ КИЛӘСӘККӘ

В. Соловьевтың "Поединок" программаһында ЛДПР лидеры В. Жириновскийҙың чечендар үрсемәһен өсөн, уларға бала табыуға квота булдырырға кәрәк, тип бар ғәләм алдында төкөрөк сәсеүен нисек аңларға? Тап ошо әҙәм яманы була, минеңсә. Нисек кенә текә күренергә тырышһа ла, ҡасандыр ул да тупраҡҡа әйләнеп юҡҡа сығыр. Онотолор. Тик уның башҡа милләт халыҡтарының йөрәген телгеләп, тоҙ итеп һалған һүҙ яманы китмәҫ бер ҡасан да. Беҙҙе лә бер ваҡыт монголдар араһына ҡыуырға янағайны бит. Һуңынан, яңылыш әйттем, тип ғәфү үтенһә лә, һаман онотолмай ул һүҙҙәр, кеше яманлығы хаҡында иҫкәртеп тора. Кешенең битенә төкөрөп, ғәфү итегеҙ, теләмәгәйнем, тип әйтеү әҙәм яманы булмай нимә һуң ул?

*Тәбиғәт эскерле була алмай. Уның бар ҡылмышы - ихласлыҡ. Ә бына В. Соловьевтың "Поединок" программаһында ЛДПР лидеры В. Жириновскийҙың чечендар үрсемәһен өсөн, уларға бала табыуға квота булдырырға кәрәк, тип бар ғәләм алдында төкөрөк сәсеүен нисек аңларға? Тап ошо әҙәм яманы булалыр ҙа инде. Нисек кенә текә күренергә тырышһа ла, ҡасандыр ул да тупраҡҡа әйләнеп юҡҡа сығыр. Онотолор. Тик уның башҡа милләт халыҡтарының йөрәген телгеләп, тоҙ итеп һалған һүҙ яманы китмәҫ бер ҡасан да. Беҙҙе лә бер ваҡыт монголдар араһына ҡыуырға янағайны бит.*

**Мөнир ШӘЙХЕТДИНОВ:** Тәбиғәттә кеше кәйефенә кире тәьҫир итеүсе әленән-әле булып торған күренештәр (һыу баҫыуҙар, ҡоролоҡ, йәйге селлә, ҡышҡы селлә, саранча ябырылыуы) ваҡыт үтеү менән юҡҡа сыға, эҙемтәләре бөтөрөлә, әкренләп онотола. Әммә йөрәккә кемдер һалған йәрәхәт, айҙар, йылдар уҙһа ла, уңалмай, уның йөйө ҡала, ваҡыты-ваҡыты менән иҫкә төшөп тора. Кеше бер ваҡытта ла үҙгәрмәй шул, үҙ асылында ҡала.

**Лена АБДРАХМАНОВА:** Яман көн, тип, ғәҙәттә, оҙайлы ямғырҙы йәки ҡарлы-буранлы көндө әйтәбеҙ. Был күренештәр, ысынлап та, ваҡытлыса. Беҙҙең көндәргә тиклем дә һауа торошо үҙгәреш кисергән. Әммә уларҙың бөтәһе лә артта, үткәндә ҡалған, сөнки болотто таратыр ел, донъяны яҡтыртыр ҡояш бар, эҫе томра көндө алмаштырырҙай еләҫ кис, саф ысыҡлы таңдар бар. Һауа торошо төрлө булған кеүек, әҙәмдең дә төрлөһө бар - яҡшыһы ла, яманы ла. Яман холоҡло, яман һүҙле кешеләрҙе ысын мәғәнәһендә йәлләйем мин, сөнки үҙҙәренең яман ҡылыҡтарынан, иң беренсе, уларҙың үҙҙәренә ҡыйын. Кеше яман булып тыумай, ә йәшәгән мөхитенә, көнкүрешенә, уратып алған кешеләренә яуап реакцияһы уны яман итә, минеңсә.

Китмәҫ әҙәм яманы, ти әйтем. Ул китмәһә, уның янынан үҙеңә китергә була, тип уйлайым. Һис юғында, аралашмаҫҡа, күрмәҫкә, сөнки яман уйлы, һүҙле кешенән бер ниндәй яҡшылыҡ та көтмәйһең, ундайҙар һиңә изгелек теләмәй, яйы сыҡҡан һайын һинең тәгәрмәсеңә таяҡ тығырға тора. Яңыраҡ автобуста әсәй менән баланың һөйләшеүенә шаһит булғайным. Сабый балалар баҡсаһына барғыһы килмәүен, унда кемдеңдер уны рәнйетеүен, уйынсыҡтарын тартып алыуын һөйләй. Әсәһе уға: "Һин уның янына барма, һине ятҡан, һиңә яҡшы ҡараған балалар янына ғына бар, баҡсала бит ундайҙар күберәк. Улар һиңә бер ҡасан да яманлыҡ ҡылмаҫ", - тине. Ошо һөйләшеүҙән дә һабаҡ алырға мөмкин.

**▶ Йылҡы йылына сыҡҡан саҡта үткән йылға бәйле үкенестәрегеҙ тураһында уйланығыҙмы? Киләсәккә ниндәй уй-хыялдар ҡораһығыҙ?**

**Рәшит НАСЫРОВ:** Үкенестәр, үкенескә күрә, ҡала инде ул. Тик үкенеп кенә ултырыуҙан ни файҙа! Хәҙер бит шундай заман: һәр кем үҙ мөнбәренә менеп, үҙ аҙанын әйтеп йәшәй. Өмөтһөҙ - шайтан, тиҙәр. Минең төп хыялым: телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу. Ятһам да, торһам да, тик шул хаҡта ғына уйлайым. Телһеҙ милләтебеҙ ҙә, республикабыҙ ҙа булмаясаҡ.

***✓ Яманлыҡ, яуыҙлыҡ тәбиғәттә юҡ, ә иң аҡыллы тип һаналған кешеләрҙә генә бар. Яманлыҡ элек тә булды, хәҙер ҙә бар һәм киләсәктә лә буласаҡ. Әҙәмдәге яманлыҡ көн яманы үтеп киткән һымаҡ, үтеп китһә, ҡана ла һуң.***

# БАРҠЫЛДАҠ КӘҮЕК...

## ышанып йәшәйбеҙ



**Мансур ҺИҘИӘТОВ:** Ҡалды үкенестәр. Ваҡытһыҙ сирләп китеү сәбәпле, мотлаҡ эшләрмен тип, алдыма ҡуйған эштәрем ҡалып торҙо. Үткән ғүмерҙе кире ҡайтарып булһа икән дә бит. Башланмаған йыл, минеңсә байҡалмаған ер кәүек ул. Уның һәр миҙгеле лә өмөтләндерә, алға саҡыра.

Мин ғүмерен завод эшенә бәйләгән ҡәҙимге металлург инем. Инде хаҡлы ялға сыҡҡан ирекле пенсионер дәрәжәһен алыуыма ла байтаҡ булып бара. Шуға ҡарамаҫтан, тик ултырырға ваҡыт була һалып бармай әлегә. Балалар, ейән-ейәнсәрҙәр тигәндәй, барыһы ла ваҡыт, иғтибар талап итә. Йәмәғәт эштәрендә әүҙемлекте юғалтмаҫ инем киләсәктә лә. Күп йылдар халыҡ театрында уйнаным. Йөрәккә дәрт өҫтәп тора торған шөғөл бит ул. Күңелдә бөрөләнгән, үҙем кисергән металлургтар тормошон прозала асып ҡарау теләге бар, тип сер асыу, ҡысҡырыу, тыйнаҡһыҙлыҡ булыр микән? Ат йылында аттай егелеп, шуға тотонормон, тип торам. Был ауыр, яуаплы йөк урынынан ҡуҙғатып ҡаралған.

Шәхсән үҙемдең ихтыярға бәйле үҙгәрештәргә ышаныс һаҡлайым. Һуңғы ике тиҫтә йыл арауығында киләсәккә ыңғай ҡараштың еҫен дә ҡалдырмай, мөмкин тиклем елләтеп, юҡҡа сығарып бөттөләр булһа кәрәк, минеңсә. Ғәфү итһендәр мине. Гражданин булараҡ та, тыуған илгә булған көслө илһөйәрлек тойғолары ла яҡын киләсәктәге ыңғай үҙгәрештәргә ышаныс тыуҙырмай миндә. Көн дә, йылдар буйына ла, һайлауҙар һайын ниндәй генә вәғәҙәләр ишетмәйбеҙ. Тик бөтә ишеткәндәребеҙ буш һүҙ була ла сыға. Әллә ҡолаҡтарыбыҙға берәй нәмә булған? Ә барыбер ауыҙ асып тыңлай бирәбеҙ, нимәләр көтәбеҙ... Минең әсәй (туҡһан өс йәшендә донъянан китеп барҙы) бындай осраҡта "баланға әүрәгән барҡылдаҡ кәүек", тип әйтер ине. Беҙ һаман да шул хәләттән сыға алмайбыҙ кәүек. Офоҡ артындағы һоҡланып туйғыһыҙ яҡты киләсәккә ышанабыҙ. Тик шул офоҡҡа яҡынлашырлыҡ әмәлебеҙ юҡ. Хәс тә бала саҡ-

***Һуңғы ике тиҫтә йыл арауығында киләсәккә ыңғай ҡараштың еҫен дә ҡалдырмай, мөмкин тиклем елләтеп, юҡҡа сығарып бөттөләр булһа кәрәк, минеңсә. Ғәфү итһендәр мине. Гражданин булараҡ та, тыуған илгә булған көслө илһөйәрлек тойғолары ла яҡын киләсәктәге ыңғай үҙгәрештәргә ышаныс тыуҙырмай миндә. Көн дә, йылдар буйына ла, һайлауҙар һайын ниндәй генә вәғәҙәләр ишетмәйбеҙ. Тик бөтә ишеткәндәребеҙ буш һүҙ була ла сыға. Әллә ҡолаҡтарыбыҙға берәй нәмә булған? Ә барыбер ауыҙ асып тыңлай бирәбеҙ, нимәләр көтәбеҙ… Минең әсәй (туҡһан өс йәшендә донъянан китеп барҙы) бындай осраҡта "баланға әүрәгән барҡылдаҡ кәүек", тип әйтер ине. Беҙ һаман да шул хәләттән сыға алмайбыҙ кәүек. Офоҡ артындағы һоҡланып туйғыһыҙ яҡты киләсәккә ышанабыҙ. Тик шул офоҡҡа яҡынлашырлыҡ әмәлебеҙ юҡ.***

тағы, "бәхетле булам", тип артынан етеп тә, аша баҫып та булмаған йәйғор кәүек алдатҡыс күренеш инде ул "ыңғай үҙгәрештәр".

**Мөнир ШӘЙХЕТДИНОВ:** Үкенеп йәшәргә яратмайым. Киләсәккә уй-хыялдарым да үтәлмәҫлек түгелдер, тип уйлайым.Үҙ халҡым менән республикабыҙҙа үҙ телемдә яҙышып, үҙ телемдә уҡып, үҙ телемдә һөйләшеп, үҙ телемдә йырлап, тыныс тормошта йәшәргә яҙһын!

**Лена АБДРАХМАНОВА:** Яңы йылға аяҡ баҫҡан саҡта үткән йылға ҡарата үкенестәрем юҡ тиһәм дә була. Планлаштырылған, көткән ваҡиғаларым бөтәһе лә теләгәнсә булды. Киләсәккә ҡорған уй-хыялдарҙан, әлбиттә, иң беренсе үҙебеҙҙең "Көнгәк" гәзитенең тиражы артып, уның уҡыусылары күбәйһен ине, тигәнде теләкте алға ҡуйыр инем, сөнки беҙҙең абруйыбыҙ, бәҫебеҙ-дәрәжәбеҙ баҫманың тиражына бермә-бер бәйле. Матбуғатҡа яҙылыу ваҡытында йыш ҡына "Аҡса булһа, яҙылыр инек тә ул..." тигән үкенесле, аҡланыусан яуаптар ишетергә тура килә. Йылдан-йыл гәзиткә яҙылыусылар һаны аҙайыуы, ысынлап та, милләттәштәребеҙҙең матди хәле мөшкөл булыуы менән бәйле булһа, бигерәк аянныслы. Минеңсә, башҡортостандар иң бай, иң етеш йәшәргә тейеш. Донъя иҡтисадын билдәләгән нефть, газ кәүек файҙалы ҡаҙылмалар өҫтөндә ултырған ил халҡы ярлы йәшәргә тейеш түгел һымаҡ...

**▸ Үҙегеҙҙең тормошоғоҙға бәйле берәр ҡыҙыҡлы хәлваҡиғаны, бик тә бик булмаһа, берәр лаҡап йә көләмәс һөйләп, гәзит уҡыусыларҙы көлдөрөп алығыҙ әле...**

**Рәшит НАСЫРОВ:** 1 апрелдә Аҡъяр урамы буйлап китеп барһам, бер ҡусты тейешле кеше осраны ла: "Ағай, кисә йыһанға Ер юлдашы карабы осорғандар. Унда Бөрйәндән Мөхәммәт исемле бер башҡорт егете космонавт булып осҡан", - тип әйтеп һалды. 1 апрель икәнен иҫемдә тотһам да, ҡустының ыңғайына булып: "Беләм ул Мөхәммәтте. Өфөгә барғанда күрешеп йөрөй торғайныҡ. Авиация институтында уҡый ине", тип, алдаусының үҙенең һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ебәрҙем. Ул ауыҙын асып тороп ҡалды. Яңыраҡ уны урамда тағы осраттым да, Бөрйән өҫтөндә күренгән ҡала сүрәтендәге һағымға бәйләп, уның былтыр һөйләгән лаҡабына яңыса ит үҫтерҙем: "Теге былтыр һин һөйләгән космонавт Мөхәммәт космостан ултырып, Бөрйән районы өҫтөндә яҡташтарына бушлай кино күрһәтә, ти..." Бер һүҙ ҙә өндәшә алманы ҡусты кеше. Нимә тип әйтһен инде?

**Мансур ҺИҘИӘТОВ:** Йәш инек әле. Башҡалар кәүек сиратҡа баҫып, теүәл туғыҙ йыл көттөм тигәндә, минең ҡулыма ла өс бүлмәле фатирҙың асҡысын тотторҙолар. Бәхеткә, икенсе ҡаттан ғына тура килде. Юҡһа, бейеккә менептөшөп йөрөй алмаҫ инем төн урталарында. Икенсе ҡаттан ғына тиһәм дә, күсенеүҙең нимә икәнен үҙе күсенеп ҡараған кеше генә беләлер ул. Мин дә көнөҙөно ташына торғас, ныҡ арығанмындыр, ахрыһы. Шатлыҡтан аҙ-маҙ төшөрөп алмай ҙа булмағандыр, моғайын. Фатирҙы йыл һайын бирмәйҙәр бит. Туғыҙ йылға бер генә. Хәл бөтөп тәгәрәгәнмендер, шәт. Нисек әүен баҙарына китеүем хәтерҙән юйылған. Ә бына ҡалғаны кисәгеләй күҙ алдында, тиһәм, һис алдыҡ булмаҫ. Шулай, төнөн уяндым да, тиҙ генә тора һалып, урамға хәжәт үтәргә йүнәлдем. Ялан аяҡтарға туфли ҡатып, ишек тотҡаһына үрелеүем булды, кәләшем ҡулымдан эләктереп тә алды. Китте тартҡылаш... Ул эскә һөйрәкләй, мин тышҡа ынтылам.

-Ҡайҙа йыйындың былай ҡабалан ғына? - ти.

-Бәҙрәфкә, - тип яуаплайым.

Быға ҡәҙәр ҡаҙна йортоноң комфортын татып йәшәгән булмағас, мин бәҙрәфтең өй эсендә булыу мөмкинлеген йоҡо аралаш күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ә шулай ҙа ҡатын алдында оятҡа ҡалмаҫ өсөн:

-Ашаған ерҙә хәжәт ҡылырға мин хайуан түгел дәһә,- тип тартҡылашып, урамға сығып киттем барыбер.

**Мөнир ШӘЙХЕТДИНОВ:** Ейәнсәремә дүрт йәш. Ҡала ҡунағы. Бер көндө ул мәктәп ашханаһында ашнаҡсы булып эшләүсе Фәнүрә апаһына эйәреп, ашханаға китте. Йөрөп ҡайтҡас, салбар балағына йәбешкән дегәнәктәрҙе сүпләй-сүпләй, тәьҫораттары менән уртаҡлашырға тотондо.

- Әйт әле, ҡарттай, беҙ мәктәпкә дөрөҫ юлдан барғанбыҙмы? - тип һорап ҡуйҙы.

- Әлбиттә, дөрөҫ юлдан барғанһығыҙ, - тим.

-Юҡ шул, ҡарттай, әгәр беҙ дөрөҫ юлдан барған булһаҡ, минең салбар балаҡтарын дегәнәк һырымаҫ ине һәм мин яфаланып уларҙы сүпләп ултырмаҫ инем. Тимәк, беҙ дөрөҫ юлдан йөрөмәгәнбеҙ...

Ысынлап та, Фәнүрә апаһы уны юлды ҡыҫҡартыу маҡсатында урау асфальт юлдан алып бармайынса, тура, ҡыҫҡа, дегәнәкле тар һуҡмаҡтан алып барған икән. Шунан бирле беҙгә берәрһе килһә, шаяртып: "Дөрөҫ юлдан килдегеҙме?"- тип һорайбыҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА:** Бынан бер нисә йыл элек булды был хәл. Редакцияға яңы водитель килде. Ғәҙәттә, коллективҡа яңы кеше килһә, яҡындан танышыу еңелерәк булһын өсөн сәй табыны ойоштора бит инде. Көндәрҙән-бер көндө был егетебеҙ ҙә шул хаҡта ауыҙ асты, сәйгә нимә алып килергә кәңәшләште. Беҙ сәйҙе үҙебеҙ ҡуябыҙ, ә һин сәйгә "нишебут" ҡына алып кил, тип сығарып ебәрҙек. Ул сығырға йыйынды ла, туҡтап: "Ә нимә була һуң ул "нишебут", беренсегә ишетәм", - тине. Магазинда беләләр ул, тигәс, йәһәтләп сығып китте. Бер аҙҙан кәнфит-печенье тотоп ҡайтып инде ул. Нишебут булманы, ти. Күстәнәс менән бергәләп сәй эстек тә, шулай ҙа беҙгә нишебут тейеш булып ҡалаһың, тинек. Һүҙендә тора торған кеше булып сыҡты бит егетең. Бер нисә көн рәттән беҙ һорағанды эҙләп, магазин буйлап йөрөнө. Бер үк магазинға бер нисә тапҡыр барып һорағас, һатыусы үҙе лә ҡыҙыҡһына башлаған бит. Хәҙер былар икәүләп тауарҙар исемлеген иғтибар менән тикшерергә тотонған. Унда бер ниндәй ҙә нишебут булмағас, изге күңелле һатыусы, бәлки, ҡыҙҙарың шаяртҡандарҙыр, тип, бының күңеленә шик төшөрөп ҡайтарған. Шунда ғына уның нимә икәнен әйтеп бирҙек: һылыуымдың яңы ғына һөйләшә башлаған ҡыҙы "чтонибудь" тигәнде "нишебут" тип әйтә торғайны, тип һөйләгәйнем, был һүҙ ҡыҙҙарға оҡшап ҡалды. Тәүҙә был һүҙ менән яңы килгән кассир ҡыҙҙы шаяртҡайныҡ, ул беҙҙән мутыраҡ булып сыҡты: "Нишебут бөткән, торт менән генә сәй эсерәм", тип еңел ҡотолғайны. Водителгә иһә бер аҙ йүгерергә тура килде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ситтән тороп диалог"та ҡатнашыусылар үткән йылда булған үҙҙәре өсөн әһәмиәтле ваҡиғаларҙы телгә алып үтте, иртәгәге көн тураһында ла ҡайһы бер фекерҙәрен яңғыратты. Бер аҙ ғына өмөтһөҙлөк, бер аҙ ғына зар ҙа сағылып ҡалды әйткәндәрендә. Ни эшләмәк кәрәк, кеше тормошто шулай ҡабул итә. Әлеге әңгәмәселәребеҙ эргәһендә әллә күпме шатлыҡ, бәхет тә барҙыр - кеше, ғәҙәттә, уларын шәйләмәй бит инде ул. Шәйләй торған да, шәйләмәй торған да бәхеттән яҙҙырмаһын Хоҙай кешеләрҙе!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

✔ *Ҡыҙыҡһынып, бер китапты алып күҙ һалды. Төрлө аҡыл эйәләре әйткән фекерҙәр теркәлгән йыйынтыҡ икән. Бер биттә аҫтына ҡәләм менән һыҙылған юлдарға иғтибар итте: "Тел кешегә бәғзе уйҙарын йәшерә алһын өсөн бирелгән".*



Гөлнур ЯҠУПОВА

# СОНАР

(Хикәйә)

*"Дөрөҫлөккә оҡшамаған һымаҡ хәҡиҡәттән дә гүзәлерәк нәмә юҡ".*
*Стефан Цвейг.*

– Балам, тим, Илнур, беҙҙең килен телһеҙме әллә ул? Ни әйтһәң, шуға йүгереп тора ла былай, һөйләшмәүе аптырата. Инде теүәл бер тәүлек йәшәп ташланыҡ, ләм-мим һүҙ ҡуҙғатмай. Үпкәләгән-фәлән тиһәң инде, йылмайып тора үҙе. Әлләсе...

Әсәһе, шулай һөйләнә-һөйләнә, аяғына кейҙе лә ауыл араһына сығып китте.

Телһеҙ? Уның кәләше, уның Зәһираһымы? Ҡапыл тынын ҡурып алған ярһыуҙан саҡ арынды Илнур. Һуң, телһеҙ булғас, телһеҙ инде. Нишләтерһең. Әсә кешене оҙаҡ алдап буламы ни? Килен төшөрөүенә күпме генә, һиҙгер тә алды, ана. Аҙналар буйына күҙе-башы томаланып йөрөргә Илнур түгел инде.

...Өфөләге "Аҡ тирмә" клубында танышты улар, урындары йәнәш тура килгәйне. Ул кистә бында шиғриәт бәйгеһе булды. Тамашасы призы ла ойошторолдо. Илнурға ҡалһа, кемдең шиғыры шәберәк, кемдеке ҡайтышыраҡ икәнен өҙөп кенә әйтә алмаҫ ине.

Был уйҙарын егет янындағы ҡыҙ менән дә уртаҡлашты.

- Эйе шул, дөрөҫ уйлайһығыҙ, - тигәнде аңланы ул ҡыҙҙың күҙ ҡарашынан. Фекер уртаҡлығы уларҙы тиҙ арала яҡынайтты. Ҡайтҡанда бер автобуста һөйләшеп ҡайттылар.

- Кисә оҡшанымы?

Ҡыҙ йылмайып баш ҡаҡты. Тулҡын-тулҡын булып яурынына ятҡан ҡуйы ҡара сәстәре эргәһендә баҫып торған ағайҙың битен ҡытыҡланы, ахырыны, уныһы сырайын һытып, боролоп баҫты. Их, шул сәстәргә бер генә ҡағылырға, шул тулҡындарға күмелергә, тип уйлап алды Илнур.

- Әйҙә, яҡшылап танышайыҡ әле, мин Илнур булам, ә һин?

- З... - Ҡыҙ шаяртырға булдымы, исеменең баш хәрефен генә автобустың тирләгән тәҙрәһенә яҙып күрһәтте.

- Земфира!

"Юҡ", тигәндәй, башын сайҡаны тегеһе.

- Зәлифә, Зарема?

Ҡыҙҙың шаян күҙҙәре: "Түгел, түгел", - тип яуапланы.

- Зәһира!

-Эйе! - тип, көлөп ебәрҙе ҡыҙ. Тимәне шул, тимәне... Ә шундай итеп ихлас көлдө, "эйе" тигәнде аңлатты ла ҡуйҙы.

Илнур Өфөгә бер айлыҡ курсҡа уҡырға килгәйне. Институт тамамлап, инженер булып эшләп йөрөүенә өсөнсө йыл ғына булһа ла, уны ебәрҙеләр колхоздан. Бүтәндәр ситкә тигәндә бик ҡуҙғалып бармайҙар шул, ғаиләләләр бит.

- Ярар, ҡустым, сәсеүҙе арыу ғына үткәрҙең, уҡып ҡайт.

Рәйес шулай тип тороп ҡалды. Илнурға нимә, әсәһе әйтмешләй, ҡойроҡто һыртҡа һалып сыҡты китте.

* * *

Яҙмыштыр инде, тап шул арала ул Зәһираны осратты.

Егерме алтыһын тултырып килгән Илнурға инде ауыл ҡыҙҙары ла ҡул һелтәп бөткәйне. Кино-фәләнгә барһа ла, тансыға ҡалмай, ҡайта ла китә. Ҡарт буйҙаҡҡа әйләнеп бара. Быны шул кешенең йоҡонһорап барған күңелен уятып, арбаны ла ҡуйҙы Зәһира.

Ҡыҙ бик һөйләшеп бармаған, нишләһен, күберәк Илнур һүҙ ҡатты. Ауылы, әсәһе тураһында һөйләне, үҙе менән булған төрлө ҡыҙыҡтарҙы иҫкә алды. Әлеге заманда уғата ҡатмарланып киткән сәйәсәткә лә төшөп киткеләне. Ара-тирә яуап көтөп, Зәһираның күҙҙәренә ҡараны: аһ, ул күҙҙәр... "Шундай күҙҙәрең барында тел кәрәкме ни, иркәм!" Сеү, ошо уй күпме тапҡырҙар башына килгәйне Илнурҙың. Һөйләшә торған күҙҙәр! Күлдәй тәрән, әлеһән-әле үҙгәреп торған гәжәп күҙҙәр. Бер ҡараһаң, аяҙ июнь күге кеүек зәп-зәңгәр, икенсе ҡараһаң, йәм-йәшел. Ә уның һиҙгер ҡуйы керпектәре, тойғоларын ап-асыҡ күрһәтеп торған ҡыйғас ҡаштары! Тауышһыҙ ғына һөйләшеүсе ирендәре! Ысынысын, һөйләшә бит ул ирендәр. Илнур тиҙ үк улар әйткәнде аңларға, тойомларға өйрәнде. Гәжәп... Зәһираның бармаҡтары ла һөйләшә, билләһи. Улар, ҡош кеүек талпынып, берсә елпенеп осоп китәләр, берсә ҡәйелеп ҡолап төшәләр. Егеткә "Мин һине оҡшатам!" тип тә тап шул бармаҡтар әйтте түгелме?

* * *

– Уф, ошо ауыл араһына сыҡһаң, әллә күпме эшең ҡала, - тип зарлана-зарлана әсәһе ҡайтып инде. - Әхирәтемә инеп сыҡҡайным, ҡыҙы, Рәсиләһе, ҡайтҡан Өфөнән. Ни... - Шунда хәбәрен ҡырт туҡтатты ла, әсәһе мейес тирәһендә булышырға тотондо. Сәйер. Һүҙе улай тиҙ генә осланмай торғайны гәҙәттә.

"Беҙҙең килен телһеҙме әллә ул?" тип, Илнурҙы һиҫкәндереп сығып киткәненән һуң түгел инде был ҡайтып инеүе әсәһенең. Ул ваҡыттан бирле өс йыллап ваҡыт үтеп киткән. Ә шул арала был өйҙә өс ғүмергә етерлек ваҡиғалар булып уҙған. Иҫләп алып китһән, йөрәк әрнетеүҙән башҡаға ирешмәйһең дә, бүтәнсә сараң юҡ.

Беренсе тапҡыр, эйе, "Аҡ тирмә"лә күрештеләр. Икенсе йомала ла шунда барҙы Илнур. Өмөтө бушҡа булманы, Зәһира фойела уны әллә ҡайҙан күреп, йылмайып тора ине. Иптәш ҡыҙына ниндәйҙер ишара яһаны ла, Илнурға ҡаршы атланы. Ул да булмай, концерт башланды. Сәхнәгә беренсе булып инде ярайһы танылып өлгөргән сәсәниә сыҡты. Үҙе яҙған ҡобайырҙарын ул ниндәй аһәң менән башҡара! Бер кешегә Хоҙай күпме һәләт биргән: шағирәлек, йырсылыҡ, ә буйһын, һомғол хәрәкәттәр...

- Әйтә бит, ә, ҡайҙан таба шундай йән тетрәткес һүҙҙәрҙе, - тип шыбырланы Илнур Зәһираның ҡолағына. - Минең әсәйем йырлай торған: "Ал ебәкәй йомшаҡ тел кәрәк", - тип, ысынлап та... Бәй, әллә илайһың?

- Юҡ, юҡ! - тип баш һелкте Зәһира, тиҙ генә ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөртөп алды. Сәхнә уттары сағылған зур зәңгәр күҙҙәре мөлдөрәмә йәш ине, "юҡ" тиген була...

Илнур ҡыҙҙы өйөнәсә оҙата барырға булды. Зәһира ҡарышманы. Аптырауын белдереп, ҡаштары сөйөлөп киткәйне, керпектәре һәлмәк кенә елпенеп "Ярай", тине...

- Әсәйеңдең ҡулына тапшырам да, тыныс күңел менән ҡайтып китермен, - тине Илнур.

- Риза, - тип яуапланы ҡыҙҙың бармаҡтары, еңелсә генә Илнурҙың ҡулдарына ҡағылып.

Ишекте ҡырҡ йәштәр самаһындағы һылыу ҡатын асып ҡаршыланы.

- Әллә инде минең ҡыҙым да өйгә егет алып ҡайтҡан, - тип йылмайҙы һылыу ҡатын һәм егеткә бик һынсыл итеп ҡарап ҡуйҙы. Зәһира төҫкә әсәһенә оҡшамаған икән, тип уйланы Илнур, әсәһе ҡара күҙле, буйсанараҡ та.

Түргә үттеләр. Өй эсе бөхтә. Күңелгә нисектер рәхәт. Ҡыҙ уны эстәрәк бер бүлмәгә етәкләп алып инде, моғайын, үҙенең бүлмәһелер.

- Зәһира, ҡыҙым, булышһаң ине, - тип кухнянан тауыш бирҙе ул арала ҡыҙҙың әсәһе, - ҡунаҡты сәй эсермәй ебәреп булмай инде.

Ҡыҙ күбәләктәй осоп сығып китте. Күҙгә бәләкәйерәк тә һымаҡ, әммә шундай һөймәлекле, күтәреп кенә йөрөткө килә үҙен. Илнур бүлмәгә күҙ һалды: өҫтәл: карауат, теген машинкаһы, тәҙрә төбөндә - гөлдәр. Ә күпме китаптар! Тотош бер стенаны кәштәләр алып тора. Ҡыҙыҡһынып, бер китапты алып күҙ һалды. Төрлө аҡыл эйәләре әйткән фекерҙәр теркәлгән йыйынтыҡ икән. Бер биттә аҫтына ҡәләм менән һыҙылған юлдарға иғтибар итте: "Тел кешегә бәғзе уйҙарын йәшерә алһын өсөн бирелгән". Был фекер мәрәкә тойолдо уға...

Торараҡ сәй эстеләр. Һәүетемсә генә һөйләшеп ултырғанда, Зәһираның әсәһенең нимәнелер ҡапыл иҫенә төшөргәндәй, сырайы үҙгәреп китте лә, ҡыҙын күршеһенә йомошҡа сығарып ебәрҙе. Илнур, был тиктомалға түгелдер, тип уйлап та өлгөрмәне, апай кеше уға туп-тура ҡарап әйтте лә һалды:

- Улым, ҡарап торам-торам да, һин, ахыры, Зәһираның телһеҙ икәнен белмәйһең. Әллә белмәмешкә һалышаһыңмы? Алдап китергә уйың булһа әгәр, йөрөмә, аяҡ баҫма бүтән.

Илнурҙың башына бер күнәк һыу ҡойҙолармы ни! Шулай һиҫкәнеп, ҡалтыранып китте. Зәһира телһеҙ?

- Белмәйһең икән шул, - тине уның йөҙөнән бөтәһен дә уҡып торған зирәк апай. - Ә балам ҡанатланып йөрөй. Белә-күрә ғашиҡ булдың, тип уйлайҙыр...

Апай әҙерәк тынысланғас, үҙенең ғаиләһенә килгән оло фажиғәне һөйләп бирҙе. Зәһираға биш кенә йәш була ул сакта. Ғаилә менән мотоциклға ултырып, бәшмәккә китеп барғандарында йөк машинаһы төрттөрөп китә. Ире һәләк була, ҡыҙы ҡурҡыуҙан телдән яҙа...

- Баланың ҡолағы ишетә, теле юҡ. Нишләмәк, телһеҙҙәр мәктәбендә уҡыттым инде. Үҙем өйҙә телдән төңөлмәһен тип гел һөйләшеп йөрөнөм. Ул да эстән һөйләшергә өйрәнде. Мин уның ирендәренең ҡыймылдауына ҡарап, ни әйткәнен күрәм.

- Күрәм, тиһегеҙ, ә мин бит уны ишетәм, - тине Илнур, үҙенең бөтөнләй ғәжиз хәлдә ҡалыуын йәшермәй.

Апай уға гәжәпләнеп ҡарап торҙо ла: "Бәлки, Хоҙай ҡушып, берҙән-бер көндә теле асылып китер әле", - тип ҡуйҙы.

Ул арала Зәһира ҡайтып инде. Илнур тағы күпмелер ултырҙы ла ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалды. "Тағы осрашҡанға тиклем", тип ҡалды ҡыҙҙың күҙҙәре. "Мин һине көтәм", тип хушлашты уның бармаҡтары.

Дөйөм ятаҡтағы шау-шыу тынғайны ул ҡайтыуға. Төптәге карауатына барып ятты ла, Илнур ебе өҙөлгән муйынсалай һибелешкән уйҙарын берәмләп кире теҙә башланы. Ике кис осрашып, үҙенсә һөйләшеп йөрөсәле күҙең төшкән ҡыҙыңдың телһеҙлеген белмәй. Әҙәм ышанмаҫлыҡ. Әле килеп, ул үҙе лә ышанмай. Ә бит шулай булды! Сихыр тиһәң... Хәйер, сихырҙыр был, мөхәббәт сихыры. Ғашиҡтар бит доньяны бары үҙе теләгән төҫтәрҙә генә ҡабул итә, ҡолағы талымлағанды ғына ишетә, йөнө сарсағанды ғына һөйә. Ғашиҡлығына шиге юҡ Илнурҙың. Тик шулай ҙа, күҙе бәйләндеме уның, ни булды? Нисек инде бергә йөрөгән кешенең телһеҙлеген белмәҫкә? Һиҙемләүе былай, әгәр иҫкәрһә, шыбырлаған булған икән. Иҫкәрмәгән, иҫәүән, хәҙер бына берәм-берәм хәтеренә төшә: Зәһираның исемен әйтмәй ҡыланыуы, теге иптәш ҡыҙы менән ишаралап һөйләшеүе...

Шунда ул ҡапыл үҙенең уйҙарынан үҙе сирҡанып китте. Нимәләр уйлап, кем алдында аҡланып ята һуң ул? Әлегәсә берәүгә күҙе төшмәй ҡаңғырып, төңөлөп бөткән йәнен кем уятыр, мөхәббәте менән хыялый итер, тип әҙ зарыҡтымы ни? Таптым уны тигәндә, ваз кисергәме? Ғүмергә ваз кисмәйәсәк! Зәһира - уның яҙмышы, мөхәббәте. Яҙмыш ҡуктәрҙә хәл ителә, ти. Тимәк, хәл ителгән.

Иртән дә Илнур Зәһира хаҡында уйлап уянды, әйтерһең, мөхәббәте уны баш осонда ғына керпек ҡаҡмай көтөп торған. Ысын бит был хис, ихлас, тын алған һайын күңелендә - ул ғына. Ауылға ҡайтып әйләнәйем, әсәйгә әйтәйем дә, Зәһираны килеп алайым, тип хәл итте Илнур. Бик тиҙ түгелме, әҙерәк һынашып йөрөргә кәрәкмәйме, тигән уй ҙа килеп инде башына, әммә егет уны шарт ҡына кире сығарып ебәрҙе...

- Зәһира, мин һине яратам. - Илнур был һүҙҙәрҙең үҙ ауыҙынан йәп-йәтеш килеп сығыуына, гәп-гәҙәти яңғырауына бер аҙ аптырап китте. Шулай була икән дәһә. Юҡ, барыбер гәҙәти түгел, ана, нисек йөрәге дарҫлап тибә. Ә ҡулдары ни ҡылана? Илнур иплəп кенә ҡыҙҙың сәстәренә ҡағылды, бармаҡ остары менән уның ҡыйғас ҡаштарын һыйпаны. Алһыу ирендәр саҡ ҡына дерелдәп ҡуйҙы. Шул ымды ғына көтөп торған егет ҡыҙҙы ҡосағына алды, ирендәрен йотлоғоп үпте.

- Ризаһыңмы минең кәләшем булырға?

Зәһира Илнурҙың күкрәгенә тағы ла нығыраҡ һыйынды. Тимәк, риза!

Ҡыҙҙың әсәһен күндереүе ауырыраҡ булды.

- Бер күргән кешегә кейәүгә сығырға тораһыңмы? - тип теҙеп алып китте ул ҡыҙына. - Ауылда йәшәп ҡарағаның бармы, бында күнеккәнһең, дуҫтарың, эшең бар. Үҙ хәлеңде лә онотма, балам, ни генә тимә...

Шунда Илнур сәйер бер күренешкә шаһит булды. Хәйер, Зәһира менән әсәһенә күнегелгән хәлдәр инде ул, тулҡынланған мәлдәре булғас, ғәжәпләнер был, тип уйлап та тормағандарҙыр. Ҡыҙы ирендәрен генә ҡыймылдата, ара-тирә ҡулдары менән дә әллә ниндәй ишаралар эшләп ала, ә әсәһе ҡәҙимгесә һөйләшә:

- Юҡ тигәс, юҡ. Һин минең гәзиз балам, әллә ҡайҙа ҡағылып-һуғылып йөрөргә...

- Ышанам, тисе. Нисә көн әле белеүеңә. Яратам, тиһәсе. Тиер инде.

- ...

- Ай, Алла, нишләүең был, Зәһира? Бар, улай булғас, эйәр ҙә кит. Әсәйеңдең һүҙен тотмаҫ булғас.

- ...

- Юҡты ғына һөйләмә, балам. Кеше көлөр, улайтһан. Ҡуй-ҡуй, ҡайтып килһен, бәлки, әле килмәҫ тә, шунан тағы һөйләшербеҙ.

Илнур Зәһираның нимә әйткәнен ишетеп торғандай булды. "Бөгөндән эйәреп китәм, сәмемә теймә, әсәй, мин уға ышанам", тине лә ул...

Ҡыҙҙы киске автобус менән ауылға алып ҡайтты Илнур. Әсәһе уларҙы ҡапҡа алдына уҡ сығып ҡаршы алды. Оста ике апай төшөп ҡалғайны, йүгереп килеп һөйөнсө лә алғандар икән. Шулай инде ул ауыл ерендә.

**(Дауамы бар).**

ИҒТИБАР: КОНКУРС!



# БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

**2014 йылдың Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителеүе айҡанлы "Бер һүрәткә ҡарап" тигән конкурс иғлан итәбеҙ.**

Конкурс шарттары түбәндәгесә:

- конкурсҡа танылған рәссамдарыбыҙҙың һүрәттәре тәҡдим ителеп, гәзит уҡыусыларыбыҙҙың шул һүрәттәр буйынса үҙ фекерҙәрен яҙып ебәреүе талап ителә;
- һүрәттәр айына бер-ике тапҡыр алмашынып торасаҡ, һәр осраҡта конкурс өсөн рәссамдың бер һүрәте, уға ҡыҫҡаса аңлатма тәҡдим ителәсәк;
- конкурста ҡатнашыусылар теге йәки был рәссам эше буйынса үҙенең фекерен ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер кәлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә һ.б.) яҙып ебәрергә тейеш;
- конкурс эштәрен баһалағанда унда ҡатнашыусы рәссам һүрәтенең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүешле аса алыуына төп иғтибар йүнәлтеләсәк;
- конкурсҡа йомғаҡ Мәҙәниәт йылы аҙағында яһаласаҡ, иң яҡшы аңлатма яҙыусы менән бер рәттән иң яҡшы баһа алған рәссам да конкурс еңеүсеһе итеп иғлан ителәсәк.

Бисмиллаға, танылған рәссам, Ш.Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән һүрәтен тәҡдим итәбеҙ. Иғтибар менән ҡараһығыҙ, һуңғы уғын керешенә һалған яугирҙың үҙенә табан әллә күпме уҡ осоп килә. Бер яҡтан уйлаһаң, уның ошо рәүешле яуға сығыуы мәғәнәһеҙлек кеүек, сөнки ул һәләкәткә дусар. Икенсе яҡтан ҡараһаң, был күренеш халҡыбыҙ тарихына үтә лә таныш, хатта халҡыбыҙҙың азатлыҡ өсөн көрәш характерын да билдәләй. Ул да булһа: үлем ҡурҡыныcы алдында ла азатлыҡ өсөн көрәшкә әҙер тороу. Бәлки, шуның өсөндөр ҙә автор был эшенең икенсе исемен "Һуңғы һартай" тип атағандыр. Кем нисек уйлай? Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ!



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТАРИХ ҺАБАҠТАРЫ...

## беҙгә лә һабаҡ

**Ирек АҠМАНОВ, тарих фәндәре докторы, профессор:** Тормош ауырлығына ҡайғырыу, көйәләнеү урынына тарих һабаҡтарын иҫкә төшөрөргә кәрәктер, тим. Беҙҙең тарих - бөгөнгөнән дә ҡыйыныраҡ хәлдәр шаһиты. Мәҫәлән, XVI быуат уртаһында Нуғай, Ҡаҙан, Себер ханлыҡтары емерелгәс, халыҡ алдында, ни эшләргә, артабан нисек көн итергә, тигән һорау ҡалҡып сыға. Ләкин аҡһаҡалдарыбыҙ албырғап төшмәй - уйлашып, кәңәшләшеп, бер фекергә килә: берәй ҙур, көслө дәүләт эсенә инергә кәрәк, тигән һығымта яһай һәм Рус дәүләте составына ҡушыла. Минең уйымса, заманына күрә бик дөрөҫ был аҙым артабан халҡыбыҙҙың һаҡланып ҡалыуына ла булышлыҡ иткәндер.

Бөгөн дә хәлебеҙ бик үк еңелдән түгел. Әммә килеп сыҡҡан проблемаларҙы хәл итеү мөмкинлегенә һәр кемебеҙ эйә. Тик бының өсөн үҙеңә ҡулайлы шөғөл табырға тырышырға кәрәк. Әйтәйек, ни өсөн ауылдарҙа кооперативтар юҡ? 15-20 кеше берләшеп, ашлыҡ үҫтереп, мал тотоп, төрлө бәләкәй предприятиелар төҙөһә, халыҡтың тормошона йән керер ине. Ләкин был хәрәкәт беҙҙең ауылдарҙа ниңәлер күтәреп алынмай.

Цивилизвция үҫкәнгә күрә, донъяла белемдең, фәндең йоғонтоһо арта. Тимәк, был - донъя аренаһына белемле халыҡтар сыға, тигән һүҙ. Беҙҙең хәҙерге иң ҙур бурыстарыбыҙҙың береһе - йәштәрҙең хужалыҡ, финанс эштәре, иҡтисад буйынса белем алыуына булышлыҡ итеү. Техник йүнәлешле юғары белем биреү усаҡтарында йәштәр аҙ уҡыуын да билдәләмәй булмай. Шул уҡыу йорттарына күберәк керһен ине улар. Хәҙер республикала уҡытыусылар, табиптар, ауыл хужалығы белгестәре етерлек әҙерләнә. Ләкин алдараҡ әйтеп үтелгән йүнәлештәр буйынса белгестәребеҙ күп түгел. Ошо юғары уҡыу йорттарында өйрәнелә торған фәндәргә мәктәптән үк нығыраҡ иғтибар биреү - тағы бер аныҡ бурыс.

"Ниңә был уҡыу йортонда беҙҙең балалар аҙ?" тип һораһаң: "Беҙгә бит математика насар бирелә", - тип аҡланалар. Бындай һүҙҙәр дөрөҫлөккә тап килмәй. Киреһенсә, башҡорттарҙың теүәл фәндәргә барымы тураһында әйтелгән һүҙҙәр ҙә билдәле бит. XVIII быуатта Рәсәй Фәндәр академияһынан Уралға, Волга буйына ҙур экспедициялар ебәрелә. Ҙур ғалимдар 4-5 йыл буйы беҙҙең тирәләге халыҡтарҙың хужалығын, нисек йәшәүҙәрен һәм башҡаларҙы өйрәнә. Бик ҙур ғалим - академик Иван Иванович Лепехин: "Башҡорт балаларының математикаға тәбиғи мөмкинлектәре бар, улар математикаға бик һәләтле", - тип яҙып ҡалдырған. Халҡыбыҙ был мәғлүмәтте лә белергә тейеш. Берәү ҙә Лепехиндан был һүҙҙәрҙе көсләп әйттермәгәндер бит? Минең ни әйтергә теләүем аңлашылалыр: ата-әсәләр көн һайын балаһының дәрестәрен тикшереп, теүәл фәндәр буйынса нисек өлгәшеүенә иғтибарын йәлләмәҫкә тейеш.

Ә беҙҙең тарихсыларҙың бурыстарының береһе - халыҡ араһында тарих белеме таратыу. Һуңғы йылдарҙа халыҡҡа барып етерлек коллектив хеҙмәттәр яҙҙыҡ. Бынан 5 йыл элек "Башҡортостан тарихы" тип аталған ике томлыҡ, 2008-2011 йылдарҙа ете томдан торған "Башҡорт халҡының тарихы" яҙылды. Республикабыҙҙың барлыҡ тарихсылары ҡатнашлығында төҙөлгән был китапта башҡорттоң бөтөн тарихы тиерлек күрһәтелде. Был китапты уҡыған кешенең уйлау даирәһе киңәйә, аңы күтәрелә. Башҡорттоң көсө нимәлә? Минең уйымса, ниндәй генә ауыр хәлдә ҡалһалар ҙа, башҡорттар күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, сәбәләнмәй.

Тарихты, ата-бабаларыбыҙҙың үткәнен, кисергәнен өйрәнеп, башҡорттоң хәҙергеһенә лә, киләсәгенә лә оптимизм менән ҡарарға кәрәк, тип уйлайым.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, ОПТИМИСТ БУЛАЙЫҠ!

# ЫҢҒАЙ УЙҘАР...

## матур тормош нигеҙе

**Хәҙер көндән-көн Ерҙең тирбәлеше, энергетикаһы, уның магнит көсәре үҙгәрә. Әлеге ваҡытта Ер дүртенсе үлсәмгә ныҡ яҡын килгән, шуға ла киләсәк йылдарҙа мөғжизәләр күбәйәсәк.**

Күптән түгел генә Бөрйәндә һауала осоп йөрөгән ҡаланы күреүселәр булды. Был да ерҙең энергетикаһы үҙгәреү менән бәйле. Йәғни, бындай кеше ышанмаҫтай ваҡиғалар кешеләрҙең аңдарын киңәйтәсәк, уларҙы уйландырасаҡ. Бындай күренештәр тағы ла йышаясаҡ әле. Һыу өҫтөнән атлап йөрөү, йыраҡ араны ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үтә алыу дәрәжәһенә етеп камиллашҡан кешеләр артасаҡ, һауала осҡан әйберҙәр күренә башлауы ихтимал.

Иғтибар иткәнебеҙ бармы икән, хәҙер ҡояш та икенсе төрлөрәк, сағыуыраҡ яҡтырта, көҙ, ҡыш көнө был бигерәк тә һиҙелә. Ҡояш байығанда элек ул байыған ер генә яҡтырыбыраҡ тора ине, хәҙер тотош офоҡ буйлап яҡтылыҡ тора. Йәшен йәшнәгәндә лә күк күкрәүе нығыраҡ ишетелә - бына былар барыһы ла ерҙең энергетикаһы үҙгәреүгә бәйләнгән. Кешеләр араһында аң кимәле күтәрелә, Ерҙең тирбәлеше үҫеү менән кешенеке лә артта ҡалырға тейеш түгел, быны аңлаусылар арабыҙҙа бихисап. Күп кеше энергетик яҡтан таҙа булырға кәрәклеген аңлай, үҙ өҫтөндә эшләй, насар уйҙар уйламай, насар ҡылыҡтар ҡылмай, барыһына ла бәхет теләп йәшәй - камил бөтөнлөккә ошолай ғына өлгәшергә мөмкин.

Әммә күптәр шул уҡ ваҡытта физик тәнгә иғтибар итмәй. Был турала күп һөйләнек, шулай ҙа сәләмәтлек өсөн мөһим булған нәмәләрҙе тағы бер иҫегеҙгә төшөрәйек. Кеҫәгеҙҙә бәләкәй генә магнит киҫәге йөрөтһәгеҙ, ҡан тамырҙары таҙара. Ә ул таҙа булһа, ҡан баҫымы төшә, матдәләр алышыныуы яҡшыра, кешенең йөҙө, тәне матурлана. Аҡ балсыҡ иң көслө тәбиғи сорбент, уны бер аҙ киптереп, иҙеп, бер балғалаҡ балсыҡты бер стакан һыуға болғап эсергә. Олоғая килә кешенең ҡанында, организмында әселек кимәле күтәрелә. Төрлө паразиттар һөжүменән һаҡланыу өсөн ярты балғалаҡ сәй содаһын йылы һыуға болғап эсеү кәрәк. Быларҙан тыш, диңгеҙ тоҙо ванналары файҙалы.

Дөйөм алғанда, тормошобоҙ үҙебеҙҙең уйҙарыбыҙға бәйле - ошоно тағы бер ҡат иҫебеҙгә төшөрәйек тә, яңы йылда ла ыңғай тойғолар ғына кисереп, шатланып йәшәйек.

**Рауфан МОРТАЗИН, космоэнергетика магистры.**

✓ *Ирҙәрҙә йәлләү тойғоho көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠ ИКМӘК...

## гүзәл затҡа зыянлы

■ Британияның "Класадо" фармацевтик компанияһы ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәргән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 53 проценты үҙҙәренә иғтибар йүнәлтеү өсөн ирҙәр ауырыуҙары тураһында арттырып һөйләй, тип уйлай. Ир-егеттәрҙең 80 проценты иһә үҙҙәренең ауырыуҙарының етдилегенә ышана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙә йәлләү тойғоho көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә. Уларҙың 29 проценты ғына ауырыған саҡта яңғыҙ ҡалырға ярата.

■ Милан милли институты (Италия) ғалимдары белдереүенсә, аҡ икмәк һәм макарон изделиеларын артыҡ күп ашау ҡатын-ҡыҙҙарҙың организмы өсөн зыянлы. 47 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был продукттар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен 2-3 тапҡыр ҙурайта. Әммә был үҙенсәлек ир-егеттәргә ҡағылмай, ти ғалимдар. Америка ғалимы Герберт Шельтон раҫлауынса, ике йәше тулмайынса балаларға бөтөнләй аҡ икмәк бирергә ярамай.

■ Татлы эсемлектәргә организм тиҙ күнегә, сөнки шәкәр баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәгенә майға ҡарағанда ла көслөрәк тәьҫир итә. Орегона ғилми-тикшеренеү институты (АҠШ) тикшеренеүселәре 100 үҫмер ҡатнашлығында һынауҙар үткәргән. Шоколад өҫтәлгән һөтлө коктейль эскәндән һуң, уларҙың мейе әүҙемлеге баһаланған. Бар коктейлдәрҙең дә калориялары бер тигеҙ, әммә ҡайһыларында шәкәр, ҡайһыларында май күберәк булған. Асыҡланыуынса, ике төр коктейль дә баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәген әүҙемләштергән, әммә шәкәре күберәк булған эсемлектәр быны тиҙерәк башҡарған. Ғалимдар әйтеүенсә, шәкәрҙе ашаған һайын, уны күберәк ашағы килә башлай. Йәғни, уға өйрәнеү икенсе бер бәйлелекте - шәкәрһеҙ тора алмауҙы булдыра.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеш үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

ЙОНДОҘҘАР НИ ТИ?

**Йыл һәүетемсә генә килмәҫ, тигәндәй була йондоҙҙар: Аттың баш бирмәҫ ҡыҙыу холҡо ла мәғлүм бит беҙгә. Ләкин йыл стихияһы Ағас аралар, бәлки, тигән өмөт тә бар, сөнки ул тыныслыҡ һәм ярашыу билдәһе икән. Шуға күрә лә 2014 йылда һәр кемгә лә бына тигән һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин буласаҡ, тик бының өсөн һәр кемебеҙгә лә бер аҙ "Ат булып" алыу кәрәк буласаҡ. Шулай итеп, йыл хужаһына ярарға тырышып, "Ат битлеген кейеү" нимәне аңлата һәм ун ике хайуан образында кәүҙәләндерелгән көнсығыш тотемдарын быйыл нимә көтә икән? Беренсенән, Аттың үҙ һүҙлелеге, баш бирмәҫлеге һәм тәүәкәллеген яҡшы беләбеҙ, ул ғәҙелһеҙлекте, мәжбүр итеүҙе өнәмәй. Шуға ла эргә-тирәгеҙҙәгеләргә үҙ фекерегеҙҙе бәйләп, уларҙы өйрәтеп маташмауығыҙ хәйерле, юғиһә, ярһыған Ат тибеп осороуы ла бар. Икенсе яҡтан, Ат аралашырға бик ярата, коллективта ул, ғәҙәттә, иғтибар үҙәгендә: аҡыллы, күп уҡыған, ҡыҙыҡлы, шат күңелле. Йылдың Ағас Ат булыуы уның йыуашлығын, уйлап сығарыу һәләттәре һәм ғәҙәти булмағанса фекерләү ҡеүәһен алғы планға сығарасаҡ, тигән өмөт юрай йондоҙҙар.**

# ЯҘМЫШ ТИГӘН АРБАЛАРҘА...

## елдән етеҙ елербеҙ



**Сысҡан** бик һиҙгер булырға тейеш: уның пландары йыш алышынып торасаҡ һәм һәр ваҡыт яңынан "үлсәп киҫергә" тура киләсәк. Сабырлыҡ менән бер рәттән, хәйлә, аҡыл, килешеүсәнлек сифаттарығыҙҙы берләштереп кенә Атты ауыҙлыҡлай алырһығыҙ. Йыл бизнес өлкәһенә уңышлы боролоштар вәғәҙәләй, бигерәк тә май айынан алып, ләкин стратегияны дөрөҫ һайлаған осраҡта ғына. Һәр бер хәл-ваҡиғаны үҙ мәнфәғәтегеҙҙә файҙаланырға әҙер булығыҙ. Йыл Сысҡандарға мөхәббәт бәйләнештәрен нығытырға ярҙам итер. Ғаиләгеҙ һәм дуҫтарығыҙ тормошоғоҙҙа мөһим роль уйнаясаҡ, уларға иғтибарығыҙҙы һәм ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Башҡа билдәләрҙән айырмалы, Сысҡандарға ат темпын тоторға тырышып, сабырға кәрәкмәй, юғиһә, былай ҙа эшһөйәр Сысҡандың хәлдән тайыуы бар.

Осоп йөрөш төплө **Үгеҙгә** бөтөнләй тәҫ түгел. Мөхәббәт, ғаилә, дуҫлыҡ кеүек шәхси мөнәсәбәттәр күп көс талап итер. Мөхәббәт хистәрегеҙҙе йәлләмәгеҙ, был Атҡа оҡшай. "Аттан - артҡы яҡтан, үгеҙҙән алғы яҡтан һаҡ булығыҙ", тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Быйыл Үгеҙ үҙенең ғәйрәте менән башҡаларға хәүеф һалырға тырышмаһын ине, киреһенсә, яҡындарының тыныслығын һаҡлаһын. Ат йылында Үгеҙ яңғыҙ ҙа тороп ҡалмаһын, был уны күңел төшөнкөлөгөнә алып киләсәк. Эшендәге, коллективтағы үҙгәрештәр Үгеҙгә күп борсолоуҙар килтереүе бар. Бер нәмәгә ҡарамайынса, еңде һыҙғанып, баш баҫып эшләргә, көн тәртибен аныҡ үтәргә, тәртипле булырға кәрәк. Яңғыҙаҡ Үгеҙҙәр быйыл үҙ яртыһын осратып, бәхетле булырҙар.

**Юлбарыҫтың** Ат менән мөнәсәбәттәре һәйбәт, шуға күрә "джунгли хужалары" өсөн яҡшы йыл башлана. Аттың энергияһы һеҙгә яңы ижади ынтылыш бирер, шул арҡала һеҙ үҙегеҙҙең уңышлы оҙайлы проекттарығыҙҙы башлап ебәрерһегеҙ. Шәхси үҫешенә һәм белемен камиллаштырыуға күберәк ваҡытын бүлһә, Юлбарыҫ эшендә ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшер. Ташып торған энергияһы эшендә һәм карьераһында ярҙам итһә лә, ғаилә мөнәсәбәттәренең боҙолоуына килтереүе бар. Икенсе яртығыҙ менән айырылышыуға барып етмәһен өсөн бесәйҙәрсә һаҡлыҡ күрһәтергә тура килер. Юлбарыҫ үҙенең һаулығына иғтибар итһен. Был йәһәттән уларға иң мөһим кәңәш: дөрөҫ диета һайлау һәм туҡланыу режимын яйға һалыу.

Ат **Ҡуяндарға** насар ҡарашта түгел, шуға күрә йыл йөкмәткеле һәм үҙгәрештәргә бай булмаҡсы. Ҡуяндарға ғаиләһе, ата-әсәһе, ғаилә милке, күптән онотолған нәҫел-нәсәбе эштәре менән ныҡлап шөғөлләнергә кәрәк буласаҡ. Тап ана шул нәҫел бәйләнештәре һәм мөнәсәбәттәренән ул үҙенә көс аласаҡ. Ғаилә мөнәсәбәттәрен нығытырға, туғандарға ярҙам итергә, туҡталып ятҡан күсемһеҙ милек, ер участкаһы мәсьәләләрен хәл итергә кәрәк булыуы бар. Был йәһәттән намыҫһыҙ кешеләр хәйләһенә эләгеүҙән һаҡ булырға, документтарҙы ете ҡат тикшерергә кәрәк.

Ғаилә һәм мөхәббәт мөнәсәбәттәре өсөн яйлы йыл. Ат Ҡуянға карьера һәм ижади эшмәкәрлек өлкәһендә ҡыйыуыраҡ ынтылыш яһарға кәңәш итә.

**Аждаһа** - Аттың ут туғаны, улар икеһе бер стихиянан, шуға ла Яңы йылда Ат һәр яҡлап ярҙам ҡулы һуҙып ҡына торасаҡ. Дөрөҫ, ут стихияһы көсөнән бер аҙ һаҡланыу ҙа ҡамасауламаҫ, юғиһә, травмалар алыу, биҙгәк сире тотоу ихтималлығы ла бар.Шулай килеп сыҡмаһын өсөн, хистәрегеҙҙе йүгәнләү кәрәк булыр. Күңелегеҙҙә негатив тупламағыҙ, асыуығыҙҙы башҡаларға төшөрмәгеҙ. Әленән- әле психолог менән аралашыу ҙа ҡамасауламаҫ, даими рәүештә медитация менән шөғөлләнегеҙ. Уйланып бөтмәгән яңы идеяларына юл асып, Аждаһа эшендә һәм хатта өйөндә эш боҙоуы ла ихтимал. Был йәһәттән дуҫтарының кәңәшенә ҡолаҡ һалып эшләү файҙалы булыр. Дуҫтары менән уртаҡ эш асыу, фирма ойоштороу уңышлы килеп сыҡмаҡсы. Ғаиләле Аждаһаларға йыл тыныс тормош вәғәҙәләй. Яңғыҙаҡтарға һағыраҡ булыу ҡамасауламаҫ, сөнки уларҙың аралашыу даирәһе киңәйер, яңы таныштары барлыҡҡа килер - мөхәббәт ығы-зығыһы килеп тыумағайы.

Аҡыллы **Йылан** теләһә ниндәй хәлде лә оҫта файҙаланыр, тик йыл уның өсөн ауырыраҡ килер. Аттың елдереп сабыуы менән һаҡ Йыландың шыуышыуы араһында бер ҙә генә оҡшашлыҡ юҡ шул... Яҙмыш тәгәрмәсе аҫтына эләкмәҫ өсөн Йыланға бер аҙ борғоланырға тура киләсәк.Һөҙөмтә һеҙҙең һаулыҡта сағылыр. Иң һәйбәте - уға "өңөнән" башын сығармаҫҡа кәңәш итеlә, ғаилә эштәре менән булышып, өйөн матурлау-биҙәү һәм көнкүрешен юлға һалыу менән шөғөлләнһен. Өйөгөҙҙән аҡса ла, идеялар ҙа, энергия ла сығармағыҙ. Рухи тыныслыҡ һаҡлау өсөн йылды өйөгөҙҙә генә ултырып үткәрегеҙ. Уның ҡарауы, был һеҙгә киләсәктә ҙур ынтылыш яһарға мөмкинлек бирәсәк. Ә әлегә һеҙҙең төп шөғөл - үҙ-үҙегеҙҙе өйрәнеү, философия, уйланыу.

**Ат** үҙ йылында үҙ теҙгенендә буласаҡ. Аҙаҡҡа ҡалдырылған эш һәм проекттарҙы бойомға ашырыу фарыҙ. Бөтөн энергияғыҙҙы ижади пландарығыҙҙы тормошҡа ашырыуға, эш мөнәсәбәттәрегеҙҙе яйға һалыуға йүнәлтегеҙ, ә йыл хужаһы һеҙгә яҡшы темп бирер: бөтә көсөгөҙгә сабығыҙ, ләкин ял хаҡында ла онотоп китмәгеҙ, юғиһә, финишҡа беренсе булып икенсе берәйһе килеүе ихтимал. Ат ғаилә мөнәсәбәттәренә бик һаҡсыл ҡарай, быйыл был бәйләнеш айырыуса нығыныр. Йыл карьера үсеше өсөн яҡшы, тик хеҙмәттәштәрегеҙгә ҡарата иғтибарлыраҡ булығыҙ. Һиҙгерлек, йор һүҙлелек, тыңлай һәм һөйләй белеү - былар бөтәһе лә һеҙҙә бар - әйҙә, талантығыҙҙы күрһәтегеҙ! Елдәй етеҙ сабышығыҙҙы барыһы ла таң ҡалып күҙәтһен: һеҙ бит үҙегеҙҙең уңышығыҙға табан елдерәһегеҙ.

**Ҡуй** өсөн был үҙгәрештәр йылы: бөтөн көстө туплап, ауыр эшкә әҙерләнергә кәрәк. Нигеҙҙә, үҙ өсөндә эшкә. Өйрәнелгән унайлы донъяндан айырылырға ваҡыт: бәхет һәм яҡшы тормош тураһындағы төшөнсәләреңде үҙгәртеү өсөн күп көс кәрәк буласаҡ. Аттың уңыш килтереү билдәһе булыуын Ҡуй оҫта файҙалана белергә тейеш. Был уның өсөн эҙләнеүҙәр һәм табыштар йылы. Бәлки, уға эшен алыштырырға ла тура килер әле. Элекке һөнәри эшмәкәрлеге уны ҡәнәғәтләндереүҙән туҡтаясаҡ, сөнки унда һөнәри яктан да, шәхес йәһәтенән дә үсеш өсөн урын ҡалмаған. Никах - һеҙҙең берҙән-бер үҙгәрмәй һәм емерелмәй торған хазинағыҙ. Рухи эҙләнеүҙәре Ҡуйҙы ҡайҙарға алып барып еткерер, тик шуныһы асыҡ: ул элекке булып ҡалмаясаҡ.

**Маймыл** үҙенә хас хәйләләре һәм интригалар ҡоророға әүәҫлеге менән Атҡа бигүк оҡшап етмәй, әлбиттә. Шуға күрә уға яҡындағы 12 ай буйы тирә-йүндәгеләрҙән башын ҡатырмаҫҡа кәңәш ителә. Йыл хужаһының яҡшы мөнәсәбәтен яулау өсөн сифаттарығыҙ юҡ түгел бит: донъяға ыңғай ҡараш, тиҙ генә уйлап сығарыу һәләте, алмашынып тороусы хәлдәргә яраҡлаша белеү. Быйыл Маймылдар тормоштан бик күп һабаҡтар аласаҡ. Быйыл Маймылдарҙы бик күп танышыуҙар көтә, кешеләр уның ижад мөмкинлектәренә лайыҡлы баһа бирәсәк. Сәләмәтлекте нығытыу буйынса шөғөлләнеү өсөн яҡшы мәл.

**Әтәскә** рухи үсеш һәм мөнәсәбәттәрҙе нығытыу йәһәтенән уңайлы осор. Алда - ғәжәйеп асыштар йылы! Әтәс үҙенең хаҡлығы, кешеләргә шатлыҡ таратыу һәләттәре менән һоҡландырасаҡ. Уның маҡсатына ынтылышы, намыҫлылығы, коллектив менән аҡыллы һәм һаҡсыл етәкселек итеүе күптәрҙе таң ҡалдырасаҡ. Эш өлкәһендә артыҡ әүҙемлек һәм үҙһүҙлелек проблемалар килтереп сығарыуы бар. Ул ҙур ғына сығымдарға тарыр һәм шул арҡала күңеле төшөр, ләкин ваҡыт бөтәһен дә урынына ҡуйыр. Яңғыҙаҡ Әтәстәргә быйыл никах мәсьәләһен киләһе йылға ҡалдырып тороу хәйерле булыр.

**Эт** өсөн бик яҡшы йыл килә. Иҙге мөнәсәбәттәр, ғаилә шатлыҡтары, ижади уңыштар йылы. Ат Эткә ярҙам итә, уның тик яҡшы сифаттарын ғына күрә. Эш мәсьәләләрендә шулай ҙа иғтибарлыраҡ булыу кәрәк, сөнки Эттең тәбиғи эскерһеҙлеген һәм ышаныусанлығын яуыз маҡсатта файҙаланыуҙары бар. Ләкин һиҙгерлек күрһәткәндә, бындай хәлгә юлыҡмаҫҡа ла була. Һаҡлыҡҡа аҡса һалмағыҙ, үҙегеҙҙең тотороҡло килемегеҙгә генә өмөт итегеҙ. Карьера үсешенә йүнәлеш тота алаһығыҙ, ләкин бының өсөн күп эшләргә, үҙеңдең алыштырғыһыҙ кадр булыуыңды раҫларға кәрәк.

**Сусҡа** был йылды "тауға" үрләр. Иғтибар үҙәгендә - ғаилә: мөнәсәбәттәр нығыныр, был һеҙҙең карьеранан алып ҡараштарығыҙға тиклем булған бөтөн тормошоғоҙҙо үҙгәртер. Ғөмүмән, хәҙер тормошоғоҙҙағы күп нәмә, шул иҫәптән эшегеҙҙә лә, яраткан кешегеҙгә бәйле буласаҡ. Ә, бәлки, һөнәри өлкәләге үҙгәрештәр һеҙҙә "сусҡа-копилканы" күреүсе хеҙмәттәшегеҙ башланғысына ла бәйле булыр. Ваҡиғалар ағышына бирелеп, һаулығығыҙ тураһында ҡайғыртырға онотмағыҙ. Көн тәртибен теүәл үтәгеҙ, яҡшы итеп туҡланығыҙ. Тағы: әллә ни көсөргәнмәгеҙ. Саптар Ат былай ҙа яҙмыш-арбаһын елдән етеҙ тартыр, ә Сусҡаға ни бары уңыштары исемлеген тултыра барырға ғына тура килер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

**Сергей Суворов исемле авторҙың ошо исемдәге китабы донъя тарихындағы төрлө дәүерҙәрҙәге билдәле сәйәси эшмәкәрҙәрҙең (Черчилль, Де Голль, Цезарь, Сталин, Ришелье, Бисмарк, Иван Грозный, император Тиберей, папа Александр VI Борджиа, Людовик XI, Макиавелли, Клеопатра, Алкивиад, Палмерстон, Кеннеди, Ганнибал, Рейган, Робеспьер һ.б.) миҫалында дипломатияның нескәлектәре, власть өсөн көрәш, йылғырлыҡ һәм интригалар үреү, дошмандарҙы жезл һәм ҡан менән түгел, ә сослоҡ һәм һығылмалылыҡ менән еңеү осраҡтары тураһында бәйән итә. Уҡыусы бөйөк кешеләрҙең аҫтыртын дошмандарын нисек таныуы, насарлыҡ теләүселәрҙе башҡаларҙан нисек айырыуы, ярамһаҡланыу һәм провокацияларға бирелмәйенсә, ниәттәрен йәшерә белеүе, көтөлмәгән һәм еңеүле һөжүм итеүе, шул уҡ ваҡытта үҙе күләгәлә ҡалыуының серҙәре менән танышыр. Китапта донъяның өс мең йыллыҡ сәйәси көрәше тәжрибәһе тупланған, уларҙың нигеҙе һәм ҡанундары бөгөн дә Власть үренә походҡа йыйыныусылар өсөн көнүҙәк.**

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ



### Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит

*Дошмандарығыҙ күп һанлы һәм ойошҡан. Уларға берләшергә мөмкинлек бирмәгеҙ, һәр ҡайһыһының күңеленә аҫҡыс табырға һәм сафтарын тарҡатырға тырышығыҙ. Тарҡау һәм рухы һындырылған дошманды берәмләп еңеү еңелерәк.*

"Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит" принцибы борондан билдәле. Уны заманында билдәле ойкуменаны тулыһынса буйһондорған ғына түгел, хатта ҡан дошмандары булғандарҙың күпселеген үҙ яғына ауҙара алған Римдең дипломатия королдәре оҫта файҙаланған. Рим өсөн иң ауыр булған, беҙҙең эраға тиклем 218 - 202-се йылдарҙағы һуғышта еңеүе тап уларҙың полководецы Публий Корнелий Сципион Африканлы үҙ яғына атлылары Ганнибал армияһының нигеҙен тәшкил иткән Нумидияның бөйөк батшаһы Масиниссаны ауҙара алыуы һөҙөмтәһендә мөмкин була. Карфаген эргәһендәге Заме һуғыштарындағы хәл иткес алышта тап берләшкән нумидия-рим атлылары менән командалыҡ иткән Масинисса (римлеләр командалыҡ итеүҙе сит ил граждаһына ышанып тапшырған һирәк осраҡ) Ганнибалға тылдан һөжүм итеп, Мәңгелек ҡаланың иң ҡеүәтле дошманын тар-мар итә.

Гай Юлий Цезарь ҙа был ысул менән оҫта файҙалана. Рим дипломатияһы артабан да дошмандарын бүлгеләү алымын һуңынан Мысырҙа, Иудеяла, Әрмәнстанда һ.б. уңышлы ҡуллана

Рим алымын британдар ҙа яҡшы үҙләштерә. Тап үҙара дәғүәләшкән раджаларҙы һәм касталарҙы бер-береһенә һөсләтеү иҫәбенә уларға XIX быуатта "Британия тажының ынйыһы" булған Һиндостан өҫтөнән хакимлыҡ итеү мөмкин була. Шул уҡ ысул менән инглиздәр Африканың, Урта Азияның, Ирландияның, Яңы Зеландияның билдәле бер өлөшөн яулай. Иң мөһиме, сәйәсәт тиғән был уйында иң ҙур ставканы кемгә яһауынды дөрөҫ иҫәпләргә кәрәк. "Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит" стратегияһы властарҙың бәләкәй төркөмдәргә берләшергә, ҡеүәтен арттырырға ҡамасаулаған урында эшкә егелә. Сөнки ғәмәлдә булған власть структураһын емереү еңел түгел. Был техниканы һөҙөмтәле ҡулланыу артыҡ көс түкмәй генә берләшә ҡалған осраҡта ҡеүәтле көскә әүерелеү ихтималлығына эйә төркөмдәр менән идара итеү мөмкинлеген бирә. Шарль Голль "кешеләр идара итеүгә лә ризыҡ, һыу, йоҡо кеүек үк мохтаж. Был сәйәси хайуандарға ойошоу, йәғни тәртип һәм сыбыртҡы кәрәк", тип иҫәпләгән.

Бындай техника сәйәси фәнде, тарихты һәм психологияны аңлау кеүек үк, ҙур тәжирбә һәм сәйәси нәзәкәтлек талап итә. "Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит" принцибы объекттар үҙҙәре ошоноң менән риза булғанда ғына тормошҡа аша. Сөнки "бүлеү" һөҙөмтәһе уларҙың шәхси байыуына йәки бер кландың икенсеһе өҫтөнән хакимлыҡ итеүенә алып килә. Хәҙерге Рәсәйҙә ошо тактиканы файҙаланыу һәр ерҙә һәм аҙым һайын осрай.

**Сергей СУВОРОВ.**
**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме алтынсы көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Камиллыҡ мөхите булдырығыҙ**

Үҙегеҙҙе ыңғай фекерләүҙең яңы кимәленә күтәрҙегеҙ. Шуға хәҙер аңығыҙға эләккән һәр бер уйҙың әүҙем һәм дәрт өҫтәүсе булыуын тәьмин итергә кәрәк. Быны өсөн замандың Норман Винсет Пил кеүек бөйөк аҡыл эйәһенең аудиояҙмаларын тыңларға, Эмерсондың һәм Карнегиҙың китаптарын уҡырға, һеҙҙең менән сағыштырғанда һәләттәре лә, мөмкинлектәре лә артыҡ булмаған, әммә тормош камиллығына өлгәшкән кешеләрҙең биографиялары менән танышырға кәрәк. Тормошоғоҙҙа нимә юҡлығын уйлап, ваҡытығыҙҙы әрәм итмәгеҙ, алдығыҙға юғары маҡсаттар ҡуйып, шуларға өлгәшергә ынтылығыҙ, шулар хаҡында хыялланығыҙ. Кем йәшәү дәрте менән тулы, ғәҙәти нәмәләргә риза булыуҙан баш тарта һәм үҙе өсөн күҙҙең яуын алырлыҡ был тормош тәҡдим иткәндән иң яҡшы нәмәләрҙе генә алырға теләй, бары тик шундай кешеләр менән генә аралашығыҙ. Уңыш китапханаһын тулыландырығыҙ, характерҙы камиллаштырыу һәм тормош кимәлен күтәреү буйынса семинарҙарға йөрөгөҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Һауығыу һәм энергияны күтәреү өсөн ас тороу**

Кешеләр бик күп меңәр йылдар инде ураҙа тота. Көн буйына аҙыҡһыҙ тороу йәки диетаны һуттарға һәм емеш-еләккә генә ҡалдырыу - тимәк, организмдың барлыҡ системаһын таҙартыу, ҙур энергия алыу һәм үҙ-үҙеңде контролләү процесын һиҙелерлек яҡшыртыу. Дөйөм тонусты күтәреү өсөн айына бер тапҡыр ас торорға кәрәк.

**Өсөнсө бүлек: характер. Тыңлай белеү**

Мәшһүр шәхестең иң мөһим сифаттарының береһе - ул башҡаларҙы тыңлай белеү. Күҙ йомоп аҫҡан арала уҙған донъяла бик йыш бары тик үҙебеҙгә генә иғтибар туплап, хатта бик нығ яраткан кешеләребеҙҙе лә тыңлап тормайбыҙ. Әгәр үҙебеҙҙе уратып алыусыларҙың телмәренә ҡолаҡ һалһаҡ, быға тиклем хатта уйлап та ҡарамаған бик күп нәмә белербеҙ. Элек беҙгә күңелһеҙ, ялҡыткыс булып күренгән кешеләр тәрән фекерҙәр һәм идеялар әйтә, уларҙан һабаҡ алырға һәм уларҙың фекерен шәхси үсеш өсөн файҙаланырға мөмкин. Бынан тыш, һеҙ үҙегеҙҙә тыңлауҙың һөҙөмтәле ғәҙәтен формалаштыра башлаһағыҙ, шунда уҡ тирәяҡтағылар менән мөнәсәбәттәрегеҙ яҡшырыр. Һеҙ уларҙың фекеренә ҡолаҡ һала башларһығыҙ, һеҙҙә ихтирам һәм аңлау тойғоһо уяныр. Кешеләргә ваҡыттарын күберәк һеҙҙең йәмғиәттә үткәреү оҡшай башлаясаҡ һәм һеҙ тағы ла аралашыусан булып китәсәкһегеҙ. Тыңлай белеү сәнғәтен үҙеңдә тәрбиәләп һәм уны үҫтереп була. Ҡайһы бер стратегик кәңәштәр һеҙгә иң яҡшы тыңлаусы булырға ярҙам итер.

а) Күп һөйләүҙән тыйылығыҙ. Ошо көндән башлап эске контролегеҙҙе күберәк башҡаларҙы тыңлауға йүнәлтегеҙ.

б) Уйығыҙҙа ғына үҙегеҙҙе донъялағы иң яҡшы тыңлаусы итеп күҙаллағыҙ. Иртән бер нисә минутҡа тыңлай белеү һәләтенә иғтибар һәм ошо һәләтте көн оҙоно буласаҡ осрашыуҙарҙа нисек файҙаланыуығыҙға туплағыҙ.

в) Башҡаларҙы бүлдереүҙән тыйылығыҙ. Был барлыҡ кешегә лә хас сифат. Шундай уйын уйлап табығыҙ: туғандарығыҙ, дуҫтарығыҙ һеҙгә нимәлер һөйләгәндә һеҙ уны бүлдерәһегеҙ икән, уларға билдәле бер күләмдә аҡса түләйһегеҙ.

**Робин ШАРМА.**



# Киске Өфө

**БЕҘҘЕҢ ИНДЕКС – 50665**

# 2014

### ҒИНУАР

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шр | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| кс | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йм | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шб | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йш | 5 | 12 | 19 | 26 | |

### ФЕВРАЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | |

### МАРТ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 | |

### АПРЕЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

### МАЙ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шр | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| кс | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йм | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шб | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| йш | 4 | 11 | 18 | 25 | |

### ИЮНЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шш | | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| шр | | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| кс | | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йм | | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| шб | | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| йш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |

### ИЮЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

### АВГУСТ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шр | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| кс | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йм | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шб | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йш | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |

### СЕНТЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 | |

### ОКТЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шр | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| кс | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йм | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шб | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йш | 5 | 12 | 19 | 26 | |

### НОЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |

### ДЕКАБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 | |

Һүрәттә Илүзә Йәғәфәрова. Алһыу Сөләймәнова фотоһы.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АҠБУҘ ТОЛПАРЫМДА

## Уралымды елеп урайым...

("Һыбай сыҡтым").




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**51-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Маркиза. Вундеркинд. Рагу. Карауат. Натрий. Ампутант. Баяр. Умартасы. Биккинин. Риторика. Смакова. Янартау. Ниәт. Ғәлиева. Равиоли. Аса. Нота. Еркәүек. Троллейбус. Мырҙашев. Мәте. Цикл. Шилма. Шасси. Ранд. Яҡташ. Ҡура. Натюрморт. Ураҙа. Еңгә.

**Вертикаль буйынса:** Курс. Стәрлетамаҡ. Аҙнаев. Түш. Абрек. Ирәкте. Вето. Виски. Циркуляция. Айғыр. Ҡантар. Медикамент. Йылға. Шлюпка. Амбар. Көкөрт. Солоҡ. Мәке. Арба. Мышар. Дауам. Янғужин. Түрә. Омар. Лафет. Триер. Ашҡаҙар. Треска. Серге. Танау. Аҙна. Вирд.

АБАЙ БУЛ!

# ЕНӘЙӘТТЕҢ ТАҒЫ БЕР ТӨРӨ

**Компьютер технологиялары өлкәһендә яңы мөмкинлектәр барлыҡҡа килеү менән интернет селтәрендә порнографик материалдарҙы законһыҙ таратыу осраҡтары йышая бара, илдә тыйылған видеороликтарҙы ҡарау һәм күсереп алыуҙар, һуңынан уларҙы төрлө соцселтәрҙәргә һалыуҙар күҙәтелә.**

Ә был эшмәкәрлек хоҡуҡ боҙоу тип һанала һәм киң мәғлүмәт сараларын, шул иҫәптән телекоммуникацион селтәрҙәрҙе (интернетты ла индереп) балиғ булмаусыларҙың порнографик һүрәтләнеше булған материалдарҙы һатып алыу, уларҙы таратыу маҡсатында һаҡлау һәм таратыу булараҡ квалификациялана. Был ауыр енәйәттәр иҫәбенә инә, бының өсөн Енәйәт кодексында өс йылдан биш йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

Енәйәт ҡылғанда, яуаплылыҡтан ҡасыу өсөн граждандар үҙҙәре хаҡында аныҡ мәғлүмәтте йәшереп, уйлап сығарылған исемдәр менән файҙалана. Әммә эске эштәр органдары ҡарамағында булған ҡорамал, тәжрибә һәм белем полиция хеҙмәткәрҙәренә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хоҡуҡ боҙоусыларҙың шәхесен асыҡлау мөмкинлеге бирә.

Быйыл Эске эштәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш тәфтиш идаралығының кредит-финанс учреждениелары һәм компьютер мәғлүмәте өлкәһендәге ойошҡан енәйәтселек эшмәкәрлеген тикшереү буйынса бүлеге район судтарына 6 енәйәт эшен ҡарауға ебәрҙе. Улар буйынса хөкөм ҡарарҙары сығарылды һәм күпселеге буйынса енәйәтселәр билдәле ваҡытҡа иркенән мәхрүм ителде. Әлеге ваҡытта полиция үҙ эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше тип йәмғиәттең рухи, психик һәм физик үҫешен порнографик материалдарҙың кире йоғонтоһонан һаҡлау тип иҫәпләй. Сөнки унда һүрәтләнгән күренештәр икенсе енәйәт ҡылыуға - көсләүгә, енси характерҙағы башҡа көс ҡулланыу һ.б. эҙемтәләргә килтереүе мөмкин.

Әйткәндәй, Совет район суды ҡарары буйынса Өфө ҡалаһында 36 йәшлек ир балиғ булмағандарҙың порнографик һүрәтләнешен законһыҙ һатып алғаны, һаҡлағаны һәм уларҙы артабан интернет селтәрендә таратҡаны өсөн 4 йылға шартлы рәүештә хөкөм ителде. Был мөҙҙәттең ике йылы - һынау ваҡыты.

**Владислав ДӘҮЛӘТОВ,**
**РФ Эске эштәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш тәфтиш идаралығы тәфтишсеһе.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғул әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (5) дүшәмбе | 9:10 | 10:40 | 14:30 | 16:33 | 18:03 | 19:33 |
| 7 (6) шишәмбе | 9:09 | 10:39 | 14:30 | 16:35 | 18:05 | 19:35 |
| 8 (7) шаршамбы | 9:09 | 10:39 | 14:30 | 16:36 | 18:06 | 19:36 |
| 9 (8) кесе йома | 9:08 | 10:38 | 14:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 10 (9) йома | 9:07 | 10:37 | 14:30 | 16:39 | 18:09 | 19:39 |
| 11 (10) шәмбе | 9:07 | 10:37 | 14:30 | 16:41 | 18:11 | 19:41 |
| 12 (11) йәкшәмбе | 9:06 | 10:36 | 14:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ЯҢЫ ЙЫЛДЫ...

## еңеүҙәр менән ҡаршы алды

**Яңы йылдың һуңғы көндәрендә "Салауат Юлаев" хоккей командаһы көйәрмәндәрен бик матур еңеүҙәр менән ҡыуандырҙы.**

Юлаевсылар 26 декабрҙә Мтище ҡалаһында урындағы "Атлант" хоккей командаһы менән осрашты. Икенсе осорҙа Теему Хартикайнен башлап ебәргән голды, ике минут үттеме, юҡмы - Сергей Зиновьев, артабан Иван Вишневский, Никита Филатов күтәреп алды һәм үҙҙәре индергән берәр гол менән командаға мәрәйҙәр килтерҙе. Хартикайнен үҙе тағы бер шайбаны хужалар ҡапҡаһына ҡунаҡлатты. Атланттар был уйында ике мәрәй менән генә яуап бирә алды. Шулай итеп, осрашыу беҙҙең "Салауат Юлаев" өҫтөнлөгө менән 2:5 иҫәбенә тамамланды.

28 декабрҙә лә "Салауат Юлаев" Санкт-Петербург ҡалаһында урындағы "СКА" командаһы менән осрашып, үтеп барған 2013 йылды еңеү менән оҙатып, яңы йылға еңеү менән аяҡ баҫты. Көсөргәнешле алыш юлаевсылар файҙаһына 2:1 иҫәбенә тамамланды. Был осрашыуҙа Юрзинов тәрбиәләнеүселәре үҙҙәрен тотороҡло, йыйнаҡ тотто, теүәл пастары менән айырылып торҙо. Шулай итеп, Игорь Мирнов менән Алексей Кайдагоров һуҡҡан ике шайбаға ҡаршы яҡ команда уйын аҙағында бер шайба менән генә яуап ҡайтара алды. "Хәрби"ҙәрҙе еңеп, юлаевсылар Яңы 2014 йылға көйәрмәндәргә лә, үҙҙәренә лә бүләк эшләне. Бер көйәрмән ағай һүҙҙәре менән әйткәндә, "Юлаевсылар хәтәр шәп уйнаны!"

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

АФАРИН!

# ХАЛҠЫБЫҘ МӘНФӘҒӘТЕ...

## беҙҙең өсөн төп урында

**Яңы йыл байрамы алдынан БР Хөкүмәте йортонда әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаттарын ҡотланылар. Улар араһында скрипкасы, БР Милли симфоник оркестры дирижеры, үткән йыл Өфөлә асыҡ һауала ойошторолған "Born in Bashkortostan" ("Башҡортостанда тыуғандар") проекты авторы Рөстәм Сөләймәнов менән һәләтле йәш режиссер Айнур Асҡаров та бар. Йәштәр араһында иң абруйлы премияға лайыҡ булыусылар ниндәй тойғолар кисерә? Киләһе йыл Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда иғлан ителгән Мәҙәниәт йылына ниндәй өмөттәр бағлай? Ғөмүмән, мәҙәни кеше ниндәй була? Шатлыҡтарын уртаҡлашып, лауреаттарға ошо һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**



**Рөстәм СӨЛӘЙМӘНОВ:** Республикала мәҙәниәт өлкәһендә эшләүсе йәштәрҙе баһалай торған берҙән-бер Бабич премияһы минең өсөн оло баһа. Ғөмүмән, ижад, хис-тойғо кешеһе өсөн бигерәк кәрәк, сөнки халҡым минең эшемдән ҡәнәғәтме, республикама башҡарған эшем кәрәкме, юҡмы, тигән уйҙар алдыбыҙҙа һәр ваҡыт тора. Ситтәрҙең биргән баһаһы менән тыуған республикам биргән баһа араһында ҙур айырма тоям. Күп йылдар унан ситтә эшләп, кире Өфөгә, яратҡан Башҡортостаныма ҡайттым. Ситкә китмәһәм, республикама, халыҡ йырҙарына, башҡорт композиторҙары әҫәрҙәренә булған һөйөүөмде аңламаған да булыр инем. Бында үҙемә һәр көн һайын башҡорт көйҙәрендә, моңдарында, симфоник музыкаһында яңы асыштар асам.

Шәхсән үҙем, БР Милли симфоник оркестры өсөн үткән йыл уңышлы булды. Мәҙәниәт йылы шулай уҡ күңелле мәшәҡәттәргә бай булмаҡсы. Оркестр "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына күсәсәк, был залды беҙ оҙаҡ көттөк, беҙ был залға лайыҡлыбыҙ, тип әйтергә кәрәк. Асыҡ һауала ике сара ойоштормаҡсыбыҙ. Беренсеһе - июнь башында буласаҡ, "Башҡортостанда тыуғандар" проектын Йәштәр симфоник оркестры дауам итәсәк. Икенсеһен - сентябрь айында БР Милли симфоник оркестры үткәрә. Әлеге мәлдә уның өсөн махсус рәүештә "Урал батыр" эпосы буйынса балет яҙабыҙ. Ике акттан торған ҙур спектакль буласаҡ ул.

Мәҙәни кешегә килгәндә инде, ул мотлаҡ рәүештә рухи-әхлаҡи яҡтан үҫешкән шәхес булырға тейеш. Үҙ мәнфәғәтең халыҡ мәнфәғәте менән бергә үрелеп барғанда ғына быға өлгәшергә булалыр. Быларҙың барыһын да аңлау, донъяла дөрөҫ йәшәү, дөрөҫ маҡсаттар ҡуя белеү өсөн рух көсө, шулай уҡ юлыбыҙҙа осраған хаталарҙы, яңылышыуҙарҙы лайыҡлы үтә белеү өсөн аҡыл, зиһен көсө лә кәрәк.

**Айнур АСҠАРОВ:** Был шатлыҡлы ваҡиға яңы фильм өҫтөндә барған ҡыҙыу эш мәленә тура килде һәм шуға әле уға яҡшылап ҡыуанып та өлгөрмәнем, тиһәм дә була, әммә шул уҡ ваҡытта ижадымды тыуған республикамда тейешенсә баһалағандары өсөн ихлас күңелдән ҡәнәғәтмен. "Еңмеш" фильмы сит ҡитғаларҙа, сит дәүләттәрҙә күп һанлы бүләктәргә лайыҡ булыуына ҡарамаҫтан, ул минең өсөн Башҡортостанда алған тәүге һәм иң юғары премия, тимәк, мин дөрөҫ юлдан барам. Ижадсы ҡайһы саҡта күҙе асылмаған бесәй балаһы кеүек бит ул, нимәлер эшләйһең, шулай ҙа ул эшеңдең кәрәклегенә шикләнә биреп тә ҡуяһың. Ә бындай премиялар үҙеңә ышаныс көсөн арттыра.

Ғөмүмән, үткән йыл мәҙәниәт өлкәһендә яҡшы яңылыҡтар, яҡшы премьералар күп булды, Президент гранты барлыҡҡа килде. Үҙем эшләгән өлкәне генә алып ҡараһаҡ, әллә күпме фильмдар донъя күрҙе, БСТ-ла ғына тулы метражлы ике фильм төшөрөлә. "Мәҙәниәт йылы" тип махсус нарыҡланғас, быйылғы йыл шулай уҡ сағыу тамашалар, саралар йылы булыр, тип өмөтләнәм. Был тулҡында үҙемдең булыуымды ла, тамашасыларымды яңы әйберҙәр менән һөйөндөрә алыуымды теләйем.

Өфөлә әлеге мәлдәге башҡорт донъяһында барған мәҙәни күтәрелеш үткән быуаттың 90-сы йылдары башын хәтерләтеп тә ҡуя. Ул ваҡытта шулай уҡ яңы йүнәлештәр, яңы төркөмдәр, әйтәйек, рок төркөмдәр барлыҡҡа килгәйне. Ҡайһы саҡта шул заманда төшөрөлгән клиптарҙы ҡарайым да, уларҙың идея, сәнғәт өсөн янып эшләүенә һоҡланып ҡуям. Бөгөн дә мин башҡорт мәҙәниәтендә һәм сәнғәтендә яңы һулыш, яңы тулҡын барлыҡҡа килеүен күрәм, йылдан-йыл һәләтле ижади йәштәр күбәйә.

Мәҙәни булыуға килгәндә, ниндәйҙер этикетты белеү, үҙен, башҡаларҙы ихтирам итеү генә түгел, халҡыңа изге эштәр эшләү ҙә инә был төшөнсәгә. Тимәк, мәҙәниәтте, сәнғәтте тәрән мәғәнәлә аңлаған, уның үҫеше өсөн үҙ өлөшөн индерергә ынтыусы кешеләр бик күп.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕР ҠАРАҺАҢ - ГӨЛЗӘЙНӘП...

## Бер ҡараһаң - Көлзәйнәп

**Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында ҡулланылған үҙенсәлекле һүҙҙәр менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ.**

**Көҙәлә** - бәүеле тотмауы арҡаһында йыш ҡына аҫтын еүешләп ятҡан баланы шулай атайҙар.

**Лариван** - башҡаларҙың әйткәнен ҡолағына элмәй, үҙалдына аңлайышһыҙ итеп мығырҙаған кешегә ҡарата әйтелә. Һүҙҙең этимологияһын шулайыраҡ күҙалап була: ул "лар" һәм "иван"дан тора. Үҙалдына ларылдаусы (аңлайышһыҙ күп һөйләүсене Баймаҡтар ларылдай, Әбйәлил, Учалылар ларҡылдай, ти) Иванды аңлаталыр, күрәһең. Ә ни өсөн фәҡәт Иван? Элегерәк төпкөл ауылдарҙа йәшәүселәр үҙ телдәрендә һөйләмәүселәрҙе йәғни аңлайышһыҙ итеп һүҙ атҡарыусыларға "Иван булдыңмы әллә?" тигәндәр.

**Ай-тай** - сабыйҙың тәпәй баҫып, атлап китеүен шулай тиҙәр. Бөрйән ырыуы башҡорттары "ай-тай"ҙы "ҡал-ғал", күбәләк-тиләүҙәр "ай-һай", ти.

**Көлзәйнәп** - көйһөҙ, ыҡҡа килмәгән мыжыҡ баланы йәнтештәр: "Бер ҡараһаң - Гөлзәйнәп, бер ҡараһаң - Көлзәйнәп", - ти.

**Кеше балаһы** - үҙҙәренең ауылынан булмағандарҙы, килендәрҙе һәм кейәүҙәрҙе был ауылда ике һүҙ менән шулай атайҙар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҘЕЛ КИСМӘЙЕНСӘ...

## аяғыңды киптермә

Оло аҡыл - муйынға бау, бәләкәй аҡыл - аяҡҡа бығау.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был донъяла кешеләргә ҡарағанда... ахмаҡлыҡ күберәк.

**(Генрих Гейне).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер таш юныусы оҫта йәшәгән. Ул үҙе менән дә, үҙенең йәмғиәттәге урыны менән дә бер ваҡытта ла риза булмаған, гел зар түккән. Бына бер саҡ ул бик бай сауҙәгәрҙең өйө янынан үтеп бара икән. Ихата эсенә күҙ һалһа, унда затлы йыһаздар, башҡа әйберҙәр күҙенә салынған. "Их, мин дә шундай бай һәм ҡеүәтле сауҙәгәр булһам ине..."- тип уйлап та өлгөрмәгән, ул, ысынлап та, Хоҙай ҡөҙрәте менән бай сауҙәгәргә әйләнгән. Уның байлығына бар тирә-яҡтағылар көнләшкән, үҙе кеүек байҙар уның менән дуҫлашыу юлдары эҙләгән.**

**Бына бер саҡ был бай сауҙәгәрҙең өйө янынан ғына һалдаттар, ҡолдар оҙатыуында батшаның яҡындары, вәзирҙәре ултырған ат арбалары бер сафҡа теҙелеп үтеп китә. Ҡаланың бар кешеләре, шулай уҡ байҙары ла, был кешеләр алдында хөрмәт менән баш эйергә тейеш була. Әлеге сауҙәгәр һынына ингән таш юныусы ла уларға ошондай уҡ хөрмәт күрһәтә. Ә күңеленән генә: "Их, бына кемдә ҡеүәт! Мин дә батша эргәһендә йөрөгән бер вәзир булһам ине..." - тип уйлай. Шул арала уның был теләге тормошҡа ла аша.**

**Бына ул бик текә вәзир булып, һалдаттар уратыуында һыбайлап урам буйлап китеп бара. Тирә-яҡтағыларҙың барыһы ла уға хөрмәтләп баш эйә. Ләкин эҫе ҡояш аҫтында уның хәле бөтөп китә. Ҡояшҡа күтәрелеп ҡарай. Ә ҡояш бер ни булмағандай ергә утлы нурҙарын ҡаҙауҙы дауам итә. "Бына кемдә икән ул иң ҙур ҡеүәт! - тип уйлай вәзир. - Ҡояш булғым килә!" Уйлап та өлгөрә, ҡояшҡа ла әйләнә. Ҡыҙыу нурҙары менән ерҙе, баҫыуҙарҙы көйҙөрөп, крәҫтиәндәрҙең ҡарғышына дусар була. Ләкин үҙенең был ҡеүәтенә шатланыуы оҙаҡҡа бармай, бер саҡ оло ҡара болот килеп, ҡояшты ҡаплай ҙа, ергә ямғырын яуҙыра. Ҡояш уның аша нурҙарын ергә төҙәргә нисек кенә тырышмаһын, булдыра алмай. Шунда ҡояш һынындағы әлеге таш юныусы: "Бына кемдә ҡеүәт! Минең болот булғым килә!" тип ҡысҡырып ебәрә һәм теләге шунда уҡ тормошҡа аша. Шулай ул болотҡа, артабан болотто ҡыуып йөрөтөүсе елгә әйләнә. Елгә ҡаршы тора алған ҡая ташты күреп, ошо икән иң ҡеүәтлеһе, тип уйлап, ҡая ташҡа әйләнә.**

**Бына бер саҡ ҡая ташты сүкеш менән сүкеүҙәрен ишетеп, үҙ тәнендә ниндәйҙер үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүен һиҙеп, "Минән дә көслө кем бар икән тағы?" тип уйлай һәм аҫҡа күҙ һалһа... унда үҙенең тәүһынын - таш юныусыны күреп ҡала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5026
Заказ 4871

1582218911006